*Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ*



## Инеш

Тарихтарҙың данлы, ҡанлы, фажиғәле биттәре күп. Бик сәйер яҡтары ла етерлек. Барыһын да аңлап, төшөнөп бөтөрлөк түгел төҫлө. Бына, әйтәйек, XVIII быуат уртаһынан бер факт.

Алыҫта-алыҫта, империяның төньяғында, урманлы-һаҙламыҡлы даръялар уртаһында, бейек таш диуар менән уратылған Шлиссельбург ҡәлғәһе бар. Рәсәй батшалығына ҡаршы баш күтәргәндәрҙе йә тел тейҙергәндәрҙе – шул заман һүҙе менән әйткәндә, батшалыҡҡа ҡурҡынысլы кешеләрҙе – ғүмерлеккә тар казематтарына алған, яманаты илдәргә таралған ҡот осҡос таш төрмә ул.

Тарих шул таш ҡапсыҡтың үткән быуаттарҙағы йөҙәрләгән ҡорбандары араһынан хәтәр өс тотҡонон айырыуса яҡшы хәтерләй. Уларҙың береһе — ташҡа баҫҡан һүҙ менән батшаға ҡаты тел тейҙергән нәшриәтсе һәм яҙыусы Иван Новиков, икенсеһе — башҡорт ихтилалы етәксеһе Батырша мулла, өсөнсөһө — император Иоанн Антонович. Быларҙың береһе – утлы һүҙе, икенсеһе ҡорал менән ҡолатырға яҫҡынып, батша самодержавиеһының ҡотон алһа, өсөнсөһө, киреһенсә, тәхет дәғүәләүе менән ҡурҡынысլы булған.

Шул таш төрмәлә ошо сәйәси тотҡондар менән бер замандараҡ ябылып бик оҙаҡ ятҡан һәм аҙаҡ нисектер ҡотолоп сыға алған бер сәйер әсирҙе лә иҫкә алғы килә. Ул – алхимик Филипп Беликов тигән бер бәндә. Санкт-Петербург монета дворында аҡса һуғыусы был әҙәм ниндәйҙер мутлығы өсөн һөргөнгә ебәрелгән. Әммә хәйләкәр Филипп, батшаға ҙур вәғәҙә һәм ышаныстар белдереп, Себер һөргөнөнән ҡотола алған; имеш, ул китап яҙып, ҡаҙнаны байытмаҡсы, баҡырҙан алтын тапмаҡсы. Шул әҫәрен яҙыу өсөн уға эш урыны итеп Шлиссельбург төрмәһе тәғәйенләнгән икән. Шуныһы ла сәйер, берәүҙәре – яҙғаны өсөн, бәғзеләре яҙыр өсөн шул төрмәгә эләгә. Яҙмыштары, өлөштәренә төшкән көмөштәре шулдыр.

Баҡырҙан алтын булмаҫты, муттан ни өмөт тә, ни хәтәр. Хәтәрерәге – тегеләр. Шуға батша-император булып ултырмаҡсы Иоанн Антоновичты ла, шул батшалыҡтың ҡоло Батыршаны ла бер үк аяныс яҙмыш – фажиғәле үлем көтә.

Сабый сағынан уҡ тотҡон булып үҫкән Иоанн батша һарайы интригалары ҡорбаны булып, һаҡсы-бағауылдарҙан башҡа әҙәм һәм донъя күрмәй. Тәхеткә ултыртыр өсөн уны ҡотҡарырға теләп, төрмәгә үтеп ингән офицерҙар болаһы ваҡытында сәнсеп үлтерелһә, Батырша иһә, үҙен ҡотҡарырға теләп, төрмә эсендә бер үҙе баш күтәреп, тиңһеҙ алышта һәләк була.

Батыршаның был һуңғы алышы 1762 йылдың 24 июленә ҡарай. 1755 йылғы башҡорт ихтилалы баҫтырылғандан һуң тотолған Батырша Шлиссельбург ҡәлғәһе төрмәһендә биш йыл ябылып ята. Таш төрмәнең бер кеше һыймалы тар, ҡараңғы, еүеш һәм һалҡын казематында ятып тамам ыҙаланған был мулла зат, ниһайәт, аҡыл етмәҫ тәүәккәллеккә баҙнат итә: быға са бер кем ҡасып ҡотола алмаған дарья уртаһындағы ҡәлғә-таш ҡапсыктан ҡул-аяғы бығаулы көйө ҡасмаҡ була. Үҙ казематының тимер ишеге нисектер асылып, йоҡомһорап ултырған һаҡсы эргәһендә ятҡан балтаны эләктереп алып, уның һәм тағы ике ҡораллы һалдаттың баштарын яра саба. Төнгө төрмә аяҡҡа баҫа. Шулай ҡул-аяғы бығаулы килеш, төрмә эсендәге тиңһеҙ алышта, ҡанлы балтаһын ҡулында тотҡан хәлендә, мылтыҡ пуляһынан, штык яраһынан аяҡ өҫтө йән бирә.

“Батша төрмәһе тарихы” тигән өс томлыҡ хеҙмәттең авторы – профессор М.Н. Гернет, Батыршаның быңдай иҫ китмәле алышын “башҡорт восстаниелары етәкселәренең береһенең романдарға торошло һуңғы ғәййәр аҙымы”, тип иҫкә ала һәм батырға махсус бүлек бағышлай.

Төрмә архивтарында Батырша мулланың ҡанлы балтаһы менән бергә ҡаурый ҡәләме лә ятып ҡала. Башҡорттарҙы, Урал-Иҙел буйы мосолмандарын Рәсәй батшалығына ҡаршы баш күтәрергә өндәмә яҙған, аҙаҡ тотҡонда батшаның үҙенә табаҡ-табаҡ хат төҙөгән ҡаурый ҡәләм ул. Ҙур түрәләр ҡулынан уҙмаған, ғали адресатына барып юлыҡмаған был табаҡ-табаҡ хат-мөрәжәғәт, дәүләт архивтарында һаҡланып, быуаттар аша беҙҙең көндәргә килеп еткән. Ауыр яҙмыштарға – яманат, хәҙергеләргә аманат булып ишетелә был яҙмалар. Ул аманат хаты менән батырҙың ейәндәренең ейәндәре, тоҡомдаштарының тоҡомдаштары танышырға хаҡлы. Ни өсөн тигәндә, ул, XVIII быуат уртаһының ҡиммәтле бер яҙма ҡомартҡыһы ғына булып ҡалмайынса, шул үткән замандың ғибрәтле тарихын, халыҡтың көнкүрешен, уй-тойғоларын, теләк-ниәттәрен йәнле итеп хикәйәләгән ҙур әҙәби-тарихи бер әҫәр дәрәжәһенә лә эйә.

Батыршаның батшабикәгә – императрица Елизавета Петровнаға яҙған, ҡулъяҙмала 100-120 биттәр самаһындағы ғәйәт ҙур хаты авторҙың үҙ башынан үткән хәлдәрҙе, үҙ быуатында Башҡортостанда булған ҡанлы һәм фажиғәле тарихи ваҡиғаларҙы күҙ алдына баҫтыра, шуларҙың тере шаһиты булып тарих һөйләй.

XVIII быуаттағы Башҡортостан, башҡорт халҡының яулы-даулы тарихының бер битен, Батырша Ғәлиев етәкселегендәге 1755 йылғы азатлыҡ көрәшен яҙма документтар нигеҙендә бәйән итеп бирмәксебеҙ.

Ғибрәтле һәм хикмәтле лә ул тарих.

## БЕРЕНСЕ БҮЛЕК

### Батыршаның йәш сағы, заманаһы

Быуаттар үтә-үтә тарихтың ҡайһы бер биттәре тоноҡлана, байтағы яйлап онотола бара. Ә кеше ғүмере, кеше хәтере тағы ҡыҫҡараҡ. Һәр кем үҙ ғүмеренең хәтирәле мәлдәрен генә иҫендә нығыраҡ ҡалдыра. Исем-аты, яҙған хаты ҡалмаһа, изге эштәре яңы быуындар хәтерендә һаҡланмаһа, әҙәм исемдәре тамам юйыла. Хәтергә хәтер ҡалырлыҡ шул. Үҙ замандарында данлы шәхестәр халыҡ телендә оҙаҡ ҡалмаһа, рәсми ҡағыҙҙар һаҡланмаһа, тарих тирмәне һәммәһен онтаҡҡа сығарырға, дәүер елдәренә осорорға тора.

Батырша Ғәлиевтың йәш сағы, мәҙрәсәлә уҡыу йылдары тураһында мәғлүмәттәр сала-сарпы ғына бер-ике риүәйәттә, батшаға яҙған хатында телгә алынғанынса беҙҙең көндәргә килеп еткән.

Тыумышы менән Батырша 1709–1717 йылдар арауығына ҡарай. Ул хөкүмәт чиновниктарына биргән яуаптарында, үҙ йәшен күпмелер кесерәйтеп күрһәтер өсөн, ошо йылдар араһы даталарын төрлөсә бирә.

Тыуған ере Ырымбур губернаһының Себер юлындағы Тере Танып йылғаһына ҡойған Ҡарыш йылғаһы башындағы ауылдан. Шуға ауыл исеме лә Ҡарышбаш.

Ауылдың ҡасан нигеҙләнеүенә ҡарата төрлө риүәйәттәр йөрөй. Ҡарыш исеменең сығышын да төрлөсә фаразлайҙар. Бәғзеләре башҡорттарҙың ҡайпан-ҡарыш ырыуына илтеп ялғай. Ана бит, кешенең ғүмере генә түгел, ауыл исеме мәғәнәһе, тарихы уҡ хәтерҙән юйылырға тора.

Бер риүәйәт шуны һөйләй: Батыршаның боронғо ата-бабалары Алтай, Иртыш тарафтарынан килгәндәр. Ауылды Байбирҙе менән Туҡай уҙамандар нигеҙләгән. Тик төп нигеҙ яу-болалар ваҡытында бер тапҡыр янған. Тәүгеләр башҡорттарҙың ҡыр унлар түбәһенән. Улар, бәлки, бик боронғо һундар тоҡомонандыр. Батыршаның атаһы үҙҙәренең нәҫелырыуын әлеге Байбирҙегә, ҡыр унларға илтеп ялғар булған.

Легенда буйынса, Ҡарышбаш ауылына һуңыраҡ ситтән мишәрҙәр күсеп килеп ултырған. Егерме өс ғаилә: Аҡман, Исмайыл, Әсән, Өсәйен, Сапыҡ карттар ул-ҡыҙҙары, бар ғаиләләре менән бер урам булып төпләнгәндәр. Шуға ауылдың төп өлөшөн башҡорт урамдары, ос яғын мишәр урамы тип йөрөткәндәр.

Әлеге егерме өс ғаилә Алатыр яҡтарынан күскән икән. Үҙҙәре, Аҡ батша фарманы менән күстек, тиҙәр. Борон ата-бабалары Уҡа, Муҡшы йылғалары буйҙарында, Түбән[1] ерҙәрендә Аҡ батшаға ялланып хеҙмәт иткән, көньяҡ далаларҙан сапҡындарға ҡаршы кордон хеҙмәтен үтәгән, ылау ҡыуған, төрлө юл-йомоштарға йөрөгән. Шуға уларҙы рәсми рәүештә йомошло мишәрҙәр тип әйткәндәр. Ер биләргә рөхсәт биргәндәр, төрлө һалымдарҙан азат иткәндәр.

Кордон хеҙмәтенең хәжәте бөткәс, был йомошло-служилый мишәрҙәрҙе батша хөкүмәте көньяҡҡараҡ – Инсә, Алатыр, Сембер тарафтарына күсергән. Хеҙмәте ҡайҙа төшһә, шунда күскән, ҡара яҙмышын һөйрәп шунда һөрөлгән. Ҡара һаҡаллы нужа ҡайҙа ла артынан ҡалмаған: мишәр батша хеҙмәте тип бил бөккән, яу сапҡан, түрәләре шымсылыҡ ҡылған.

Урындан урынға ҡубарылып, Башҡортостанға күсерелеүҙәре лә үҙ ихтыярҙарынан түгел. Йомошло яҙмыш, батша фарманы йөрөткән. Башҡортостанда батшалыҡҡа ҡаршы бер-бер артлы оло-оло яуҙар ҡубып тора. Яусыл башҡорттарға бер дин, ҡан-ҡәрҙәш татарҙар, ҡыр-ҡаҙаҡтар ҙа ҡушылып китһә, эш харап. Бөтөн мосолман, төрки халыҡтар ҡуҙғалыуы бар. Бына ниңә шыр ебәрә Аҡ батша. Быға ҡаршы ҡорал ғына түгел, хәйлә-мәкерҙе лә егергә кәрәк. Дин, ҡан-ҡәрҙәшлек берлеген тарҡатырға, үҙ-ара һөсләтергә, талаштырырға. Әйҙә, шымсылыҡ ҡылып, бер-береһенә ябырылып, йәндәрен ҡыйып, туғанлыҡ, татыулыҡтары ҡороһон. Аҡ батшаның мишәрҙәрҙе башҡорттар араһына күсереүенең бер мәкерле ғилләһе нәҡ шунда.

Ҡасим тарафтарында йәшәгән, батшаға тоғро хеҙмәттәре менән ышаныс яулаған иң яһил йөҙ мишәр мырҙаһы һәм феодалдары ғаиләһе XVII быуаттың икенсе яртыһында Өфө өйәҙенең Бөрө йылғаһы буйына күсерелә. Улар өсөн башҡорт ерҙәре бушлай киҫеп бирелә. Үҙҙәре төрлө яһаҡ, һалымдан ҡотҡарыла. Аҙаҡ башҡорт яуҙарын баҫтырышҡанда биләмәләрен киңәйтәләр. Шунан Башҡортостандың төрлө төбәктәренә, яндырылған башҡорт ауылдары еренә ауыл-ауыл мишәр, татар мырҙалары, йомошлолары ғаиләләре менән күсереп килтереп ултыртыла. Татар-мишәр экспансияһы башлана. Батша хөкүмәтенең ышанысын юғалтмаған, үҙ урынында ҡалған башҡорт старшиналарына мотлаҡ мишәр писарҙары тәғәйенләнә. Күҙәтеүсе, шымсы итеп.

Ләкин донъя яуыз түрәләрҙән һәм һатлыҡ йәндәрҙән генә тормай. Килмешәктәр араһында мырҙалар ғына түгел, ярлыһы, ялсыһы, һәммәһе бар. Нужа ҡыуып йөрөткәне күберәк. Кемдәргәлер ҡайҙа ла бер ҡояш. Быларҙы Батырша һуңыраҡ төшөнөр. Әлегә тормоштоң үҙ ағышы. Йәнә йәшәүҙең үҙ ҡануны бар.

Ҡарышҡа мишәрҙәр ҡабат килеп ултырған саҡта, егет ҡорона ингән атаһы — Миңлеғәли оҙаҡламай Өсәйен ҡарттың ҡыҙын кәләш иткән. Аҫабалар менән килгән халыҡ туғанлашып, ҡоҙа-ҡоҙағыйлашып киткән. Дин ҡәрҙәшлегенә ҡан ҡәрҙәшлеге ҡушылған. Тел, лөғәт берләшкән. Тик ара-тирә юҡ-барға низағлашып йә ғауғалашып киткән саҡтарҙа ғына әсе теллеләр кемдең кемлеген ләкәп итеп иҫкә төшөргөләгән: башҡорт киҫәге, мишәр килмешәк, этәмбәй. Тора-бара мишәр ауылдары Башҡортостанда арта килгән, мишәр волостары хасил булған, башҡорт менән мишәр тығыҙыраҡ аралашҡан, батшалыҡтың бар йәбер-яфаларын бергә кисергәндәр. Нужа һурпаһын тиң һемергәндәр.

Батырша ғилем алыр өсөн ул заман Ырымбур, Ҡазан губерналарында иң атаҡлы Ғабдрахман ахун мәҙрәсәһен һайлаған. Ул мәҙрәсә

Зәй һыуы буйы Тайһуйған ауылында. Шунда илтеп урынлаштырғандар, ахун хәҙрәт ваҡыф өлөшө бүлгән. Батырша шәкерт ғилем эстәй-эстәй ниндәй шәфәғәтле мөхиткә юлығыуын, остазының бик уҡымышлылығын төшөнөр. Остазы ниндәй, шәкерте лә шундай булыр, бәлки.

Ғабдрахман хәҙрәт — ул ваҡытта Тайһуйғанда имам һәм мәҙрәсәлә мөхтәрәм мөҙәрис. Шәкерттәре бик ишле, мөриттәре күп. Шәкерттәре, Батырша шикелле, әллә ҡайҙарҙан, йөҙәрләгән саҡырымдарҙан килеп уҡып яталар. Остаздарының даны тағы йырағырaҡ таралған. Ул үҙе, ололар әйткәнсә, оҙон ваҡыттар ғилем йортонда йөрөп, рәшид сәхиб[2] булып етешкән. Шулай олуғ мәҙрәсә остаздарынан үҙе үрнәк вә ғилем алып, аҙаҡ үҙ мәҙрәсәһендә күп фәндәрҙән төплө белем биргән.

Ғабдрахман остаз аҫыл заттан да икән. Боронғо бабаһы Һаҡмар һыуы тамағында ер биләгән Биксура хан, имеш. Башҡорт батыры булып легендаларға ингән шәхес. Уның ейән-бүләләре Минзәлә вә Зәй тарафына күскән. Остазының шәжәрә ебен дә хәтеренә беркеткәйне шәкерте: Ғабдрахман бин Туймөхәммәт, бин Бикмөхәммәт, бин Янбулат, бин Яҡуп, бин Сәмән, бин Илаз, бин Ғабдулла, бин Биксура хан.

Остазының бер туған ағаһы Әлмөхәммәт тә Минзәлә яғы Әлмәт ауылында уҡымышлы заттарҙың береһе булып танылған. Унан Зәй буйына күсеп, икенсе Әлмәт[3] ауылына нигеҙ һалған. Ғабдрахман хәҙрәт үҙе тыумышы менән Муртыштамаҡ ауылынан. Төп ғүмер иткән ере, имам һәм мөҙәрис[4] булып эшләгән урыны — Тайтуған ауылы.

Остазынан нисәмә йылдар һабаҡ ала-ала, Батырша шәкерт шуны зиһененә һеңдерер һәм ныҡ фәһемләр: ул дин дәрестәренең ғәрәп телендә серле, әммә аңлайышһыҙ яңғырар тәғбирҙәренән[5], Ҡөрьән аяты вә сүрәләренән телен һәм айышын төшөнөр кимәлгә етер; исламиәт ғилемен, тарихын, фәлсәфәһен төплө үҙләштерер. Шуларҙы ул заманының бөтә барлығы, ғәмәлдәгеләре менән сағыштырып ҡарау, үҙенсә тәфтишләү әмәлдәрен юллар. Бар зиһенен егер, баш ватыр, ниндәйҙер һығымталарға килер. Шәриҡтәштәре, хатта остазы менән тора-бара мәғлүм бер бәхәсле мөсәхәбәләргә[6] инер.

Ғабдрахман мөҙәрис, өҫтәүенә, китаптар ҙа яҙырға оҫта ине. Үҙе ижад иткән “Меннә шәрхе”, “Бостан әл-фәҡиә”, “Әл-әфеттах”, “Васиәтнамә” ҡульяҙма китаптарын дәрес итеп уҡытты. Дин вә донъя әсәстәрен[7] үҙенсә фәһемләргә күндерҙе. Батырша кеүек бер нисә зиһенле шәкертенә махсус мәғлүмәттәр өйрәтергә, өҫтәмә дәрестәр бирергә һис йыбанмаҫ ине.

Ғабдрахман мөҙәристең шундай ҡөҙрәте һәм абруйы ла бар: Бөгөлмә өйәҙендә, Надир командаһы иләүендә ниндәй даулы, дәғүәле бәхәстәр ҙурға китһә, һуңғы һүҙ ахун хәҙрәткә килеп терәлә. Ғабдрахман ахун иһә уны ислам ҡағиҙәһенсә, шәриғәт ҡанундары буйынса хөкөм итә, мәсьәләне ғәҙеллек менән сисергә тырыша. Был йәһәттән дә остаздары тиңһеҙ өлгө һәм ҡалҡан ине.

* * *

Оҙон шәкерт ғүмерендә Батыршаның йөрәк-бәғерен дер һелкетеп, баҙыҡ рухын ҡымшатҡан ике ваҡиға хәтерендә мәңге уйылып ҡалған. Шәкерттең ялы-каникулы күп. Ул иртә яҙҙан ҡара көҙгәсә һуҙыла. Батырша йыл һайын тигәндәй был миҙгелен остазы хужалығында эшләп, тейешле хаҡына эйә булып иркен үткәрә ине. Бер йылды дуҫ шәриҡтәше йәй йөрөмгә үҙ тыуған яғына, Сулман даръяһы аръяғы Алабуға тарафтарына барырға, бергәләп үткәрергә димләне. Ирекһегән йән инәлтмәне – күнде. Йәй ҡолас киреп бесән саптылар, кәбәнен ҡойҙолар, ураҡ урыштылар, иген һуҡтылар, ял, уйын-көлкөһөнә лә ваҡыт таптылар.

Бер заман, күрше ауылда сыуаштарҙы суҡындыралар икән, тигән хәбәр ишеттеләр. Шәкерттәр шомланып ҡуйһалар ҙа, — ҡыҙыҡһыныуҙары көслө булғандыр инде – киттеләр бит шуны тамаша ҡылырға. Барһалар, ауыл уртаһындағы майҙанға халыҡ йыйылған. Олоһо ла, кесеһе лә күп. Старосталары, тағы кемдәрелер инде, биш-алты кеше тәртип урынлаштырып, ҡубырсыған халыҡты тынысландырып йөрөй. Арала ҡаранан кейенгән ҡара һаҡал поптары бар. Үҙҙәре ниҙер көтәләр. Шулай ҙа йыйылған ҙур төркөмдә тауыш, ғауғалаш ишетелеп ҡала. Тамаша һис кенә лә тантанаға оҡшамай. Байтаҡ халыҡ ҡырҙан ғына, яҡындағылар өйҙәре янынан, ситән аша сәйерһенеп ни буларын күҙәтә.

— Киләләр! – шундай һөрән ишетелде ауыл осонан бер мәл.

Шул оста балалар йүгерә башланы. Халыҡ араһында шыш-быш китте:

— Суҡындырмыш команда килә.

— Тағы ла ни ҡылырҙар икән, гонаһ шомлоғо!

— Хоҙайҙың ҡәһәре лә төшмәй бит үҙҙәренә.

— Телеңде тый! Ҡаратун ишетмәһен.

Уңарсы әллә күпме һыбайлы, бер тройкалы команда туҙан туҙҙырып, шом һалып халыҡ алдына килеп тә етте. Старостаһы, побы, тағы әллә кеме былар ҡаршыһына ҡауҙарланып сыҡты. Көймәнән яурындары ялтырап торған бер офицеры — уныһы башлыҡтары буғай, бер побы килеп төштө. Ике һыбайлы офицерын эйәрҙән иплəп төшөрөштөләр. Һалдаттары халыҡты урталай ярып, әлеге баш командирын, побын, дьягын таҡтанан ойҡаштырып яһалған, теҙҙән юғары күтәрмәле бер ғәләмәткә үткәрҙеләр. Өҫтөндә мөнбәргә оҡшаш бер урындығы бар, йыуантыҡ поп шунда менеп ҡунаҡланы. Ике офицеры, дьягы йәнәшәһенә баҫты. Тирәләй һалдаттары үрә ҡатты. Халыҡ шауы баҫыла төштө.

Суҡындырмыш тәҡәллефкә[8] әҙерләнеүҙәре шул икән.

Староста алдан әҙер бер төркөм сыуашты килтереп, шул таҡта күтәрмә өҫтөнә теҙҙе. Ун ике кеше. Икәүһе ҡарт, алты-етеһе урта йәштәге ирҙәр, өс-дүрт бөртөгө йәш-елкенсәк. Барыһының да өҫтәрендә бер төҫлө оҙон киндер күлдәк. Итәктәре теҙҙән түбән төшөп, ең остары, ҡулдары күренмәй, һәленеп бара.

Муйынына тәреһен таҡҡан әлеге поп, урынынан тороп, суҡынасаҡтар алдына ярым уларға, ярым халыҡҡа ҡырын баҫып, ҡалын тауышы

менән мөңрәп, тамаҡ төбөнән доғаларын уҡырға тотондо. Барыһы шымып ҡалды. Шомло өн Батыршаның йөрәген телеп үткәндәй, тәндәрен сымбырлатып ебәргәндәй итте. Хоҙай шомлоғо, мосолманыңды, Раббым, ярлыҡай күр... Шәкерт күңеленән шуларҙы ҡабатлай ине.

Поп теҙләнгәндәрҙең муйынына епкә тағылған ваҡ тәреләр элеп сыҡты. Унан эстән ниҙер уҡына-уҡына, өс бармағын бергә беркетеп, һәр береһенең маңлайына, күкрәгенә, ике яурынына ҡулдарын төртөп, берәм-берәм суҡындырырға кереште. Дьягы тотҡан һауытҡа кескәй бумалаһын манып, һыу бөрктө. Май шәм-ғәдиле менән һәр береһен уратып-сөйөп төтәсләй барҙы. Үҙе, янындағы урыҫтары “Господи, помилуй!” тип ҡысҡырып ҡабатлай ине. Суҡынмыштар ҙа ауыҙҙарын ҡыймылдаталар.

Был церемония бөткәс, поп ҡалын тауышы менән тағы ниҙер уҡыны, үҙен, тирә-йүнен, суҡынғандарын йәнә төтәсләне. Аҙаҡ тәреләрен, төтәсләмәләрен сылтыратып, килелә-килелә суҡыныу ғәләмәте яһаны, тегеләре шуны ҡабатланы.

Икенсе поп суҡынған сыуаштарға берәр пар аяҡ кейеме, күпмелер тин баҡыр аҡса өләшеп сыҡты. Йән-рухын ят иманға алыштырыу, суҡыныу хаҡы шунса икән, әҙәм йәне – баҡыр тин баһаһы, тип уйлап ҡуйҙы шәкерт. Әҙәм баштары ғына түгел, рухтары ла ниҙәр күрмәй, нисек рәнйетелмәй был заманда.

— Әллә ысҡынайыҡмы был мәхшәрҙән? Гонаһ йыйғансы, — тип бышылданы шәриҡтәше Батыршаға.

— Торайыҡ әҙерәк, ғибрәттәрен күреп бөтәйек инде.

Ярай, разыйын, бәғзе мәжүсиен суҡындырыуҙар ҙа бөттө, тиһәң, был әле башы ғына икән. Өйөрө-командаһы менән юҡҡа өйләгөп килмәгән икән шул кафырҙар.

Был ауыл хәҙер ҡатнаш: мәжүсие, суҡынғаны бар. Өҫтәүенә, унлап мосолман татар ғаиләһе йәшәй. Миссионерҙарға барыһын да суҡындырыу кәс, һәммәһе православныйға әйләнһен. Суҡындырыу тамашаһынан һуң поп халыҡ ҡаршыһына баҫып, миссионерҙарҙың “Увещательная грамота” тигән ҡағыҙын ҡысҡырып уҡыны. Уны әүәл килгән побы сыуашса, артынса татарса аңлатты. Ҡағыҙ христиан диненә күсергә өгөт-дим ҡыла. Миссионерҙар йәмғиәте күскәндәргә төрлө өҫтөнлөктәр бирә. Аҡса менән ымһындыра, һалымдарҙан, рекрут хеҙмәтенән азат итә. Суҡынғанға хөрлөк, иркенлек, йәнәһе.

Сыуаштар күндәмерәк халыҡ. Күбеһенә диненә ҡарағанда көнө. Ана шул ташламалары әүрәтә, ахырыһы. Ә татарҙарҙы тегеләй ҙә, былай ҙа һындырыуы ҡыйын. Үҙ диндәре тип ҡыйышалар. Көн-йүнгә ҡарағанда йән рухы, выжданы ҡиммәтерәк, күрәһең.

Мәҙрәсә эсендә ҡайнаған, башы ислам ғилеме, уй-хыялы илаһи хистәр менән тулған шәкерт Батырша фани донъялағы бындай ғибрәттәрҙән, башҡа һыймаҫ яман хәлдәрҙән кинәт шаңҡып ҡалғандай булды. Йөрәге пыран-заран килде, башы сатнаны, рухы рәнйене. Улай ғынамы... Хәлен әйтеп аңлатырлыҡ түгел.

Шәкерт аңлап етмәç даирә, ғәмәлдәр күп шул донъяла. Поп татарҙарҙың диненә ҡаныҕыр, ти. Попта ғына микән хикмәт? Кешене рухи ҡол итер, йәнен яулар өсөн диндәр борон-борондан алышҡан. Яман тәре походтары, дин һуғыштары, йыһаттары булған. Илдәр, халыҡтар бер диндән икенсеһенә күскән, ҡырылған. Әҙәмдең выжданын, рухын аулар әллә ниндәй руханиҙары, миссионерҙары барлыҡҡа килгән. Уларының – үҙ йәмғиәттәре.

Заманында Византия тарафынан суҡындырылған урыç иле аҙаҡ үҙе яулап алған халыҡтарҙы көсләп суҡындыра, христианлаштыра башлаған. Мордваһын, марийын, сыуашын, удмуртын, бүтәнен. Татар, башҡортҡа ла сират еткән, мырҙалары дәрәжә, мал өсөн иманын, халҡын һатҡан. Мырҙалары менән бергә ярлы-ялпыһы суҡындырылған. Татар тинтәк булмаһа, мырҙаға ҡол ҡайҙа, тигән мәҡәл шул замандарҙан ҡалған. Мосолман ҡарышҡан, ләкин ҡылыс табындырған, нужа йөгөндөргән. Татарҙар ауылы-ауылы, төбәге-төбәге менән керәшенгә әйләнгән.

Православие ҡылысын да, кәнфитен дә татытҡан. Архиепископ наказы менән Ҡазан епархияһында миссионерҙар йәмғиәте төҙөлгән. Уның суҡындырыу эштәре идараһы Свияжск ҡалаһы Богородицкий, Успенский монастырҙарында урынлашып алған. Башта татарҙарҙы христианға әүерелдереү еңелерәк барған: өс йыл булһа ла һалым-фәләндән, рекруттан ҡотолоу әүрәткән. Аҙмы-күпме аҡсаһы, кейем-һалымы тейгән. Йәбер-золом баçыла төшкән. Енәйәт ҡылһа, ярлыҡағандар. Ләкин керәшендә иман да, инаныс та бөткән. Ә мосолман иманын, әхирәтен иçләгән, рухы рәнйегән. Ҡаршылыҡ артҡан һайын поптар оторо ҡоторған. Лука Конашевич тигән бер епископы, 1740 йылды Новокрещенческая конторағa баш булып, мосолмандарҙы христианлаштырыуҙы йәнләндереп ебәргән. Ҡарышҡанын көсләп суҡындырған. Балаларын тартып алып керәшен иткән. Дмитрий атлы архимандриты аяуһыҙланған. Суҡындырыу командалары шул замандарҙа ауылдарҙа ҡыҙырып, ҡот алып йөрөгән.

Көслөнөкө замана. Батшаһы, Синоды ла хәттин шашҡандар. 1742 йылда Сенат указы менән мосолмандарҙың мәсеттәрен емерә башлағандар, яңыларын һалыуҙы тыйғандар. Ауылда бер керәшен ғаиләһе булһа ла — сиркәү, йөҙ мосолман ғаиләһе йәшәһә лә — мәсет артыҡ. Шуға мәсетен ват, емер: диндәренән дүнһендәр.

Шунан да яман ҡырағай рухи ҡыйырһытыуҙар бар микән?

Шул яманлыҡтарҙың да шаһиты булды Батырша.

Ошо уҡ көҙҙө татар ауылы Әлмүшкә әлеге команда килеп төштө. Ҡот-һуштарҙы алыр өсөнмө, әллә ул-был булмағайы типме, туптары ла бар ине был юлы. Балта-бысҡылы, лом-киркәле әҙәмдәре өçтәлгән. Ҡылыр ғәмәлдәре – әйтергә хатта тел әйләнмәй – мәсеттәрен емермәк, имеш. Ҡот осмалы хәл. Старостаһын, мулла-мәзинен алдан иçкәрткәндәр буғай. Халыҡтың саҡырмайынса ла йыйыла башлауына, теге уҡалы погонлы офицер Сенат указын уҡып ишеттерҙе. Быны тылмастары

төшөндөрөп бирҙе. Халыҡ аһ итеп, ваһ итеп ҡалды… Уңарсы ҡоралл
һалдаттары, аруҡ ара ҡалдырып, мәсетте уратып та алды, теге балтабысҡылы әҙәмдәр мәсет башына менеп тә китте. Шарт та шорт мәсеттең манара таҡталарын ҡайырырға, һүтергә тотондолар.

Халыҡ башта шаулап-ғауғалап алды ла ҡораллы һалдаттар теҙмәһе артында шомайып ҡатып ҡалды. Манара һүтелгәнен күреп, гөрләшеп бер тауыштан бәддоға уҡырға кереште, ҡарғау, янау һүҙҙәре ишетелде…

Батырша шығыр-шоғор итеүгә айнып китһә, күҙе ни күрһен, оҙон арҡанға йәбешеп, һалдаттар манараны бер яҡҡа ҡыйшайтып бара, ярым киҫелгән нәҙек ултырма бүрәнәләр шартлап һына. Күҙ асып йомғансы, ай, Хоҙай шомлоғо, манара гөрҫ итеп ергә ауҙы, мәсет айы ергә ҡаҙалды.

Ҡайҙа һуң Хоҙайы, раббыларым, ишетмәй-күрмәй микән ни? Ялбарыуҙарын нишләп ҡабул итмәй? Сабырлығы сикһеҙме, әллә гонаһлы бәндәләре ҡурсыуҙан, ярлыҡауҙан түбәнме? Бынан һуң ғажиз йәндәргә ни ҡала һуң?..

Ана, кафырҙар мәсет тәҙрәләренә арҡыры-торҡоро таҡта ҡаҙаҡлай, ишеген бикләй. Ярай әлегә бөтөнләй һүтеп ташламанылар, ҡулдары ҡороғорҙар.

Эргәһендәге дин ҡәрҙәштәренең хәлкәйгенәләре нисектер, диндар шәкерттең йөҙгөнәйе вә эскенәйе ҡара көйгән кеүек ине. Күңеленә мәңге юйылмаҫ ҡара, йөрәгенә баҡый уңалмаҫ яра яғылғайны.

Ошондай әҙәм ишетмәҫ яман эштең бүтән ерҙәрҙә лә ҡылыныуын, 1742—1744 йылдар эсендә татар һәм башҡорт ауылдарындағы 536 мәсеттән 418-енең емерелеүен Батырша һуңыраҡ белер.

* * *

— Туйгилде башҡортто яндырып үлтергәндәр!

— Ни өсөн?

— Фәҡәт үҙ диненә кире ҡайтҡаны өсөн. – Был хәбәр Батыршаны икенсе тапҡыр шаңҡытты. Шаңҡытып сикһеҙ уйҙарға батырҙы, бөткөһөҙ һорауҙар ҡуйҙы. Остарына сыҡҡыһыҙ. Ә һуңыраҡ, үҙе Гәйнә иләүе башҡорттары араһында имамлыҡ итә башлағанда, шул Туйгилдене Екатеринбург ҡалаһы майҙанында нисек тереләй утта яндырғандарын күргән керәшенде тыңлағас, Батыршаның иманы томаланды, хатта, – тәүбә, Аллаһынан, диненән яҙыр хәлгә етерҙәй асырғаныс эске дау кисерҙе. Ер өҫтөндә зобаныйҙар утында янған Туйгилде һыны үҙен гел эҙәрләр булды.

Нитмәк кәрәк, фани донъя үҙ рәхимһеҙ ҡанундары менән йәшәй шул. Тәғәйене, Рәсәйҙә мәрхәмәтһеҙ батша закондары менән.

Санкт-Петербургка ил йомошо менән барған башҡорт старшинаһы Туҡсура мулланан Урал буйҙарына ҡош телендәй генә хәбәр килеп етте. “Бойҙайҙы, кәбәк-осоғонан айырып, таҙартып ҡуйығыҙ, һаламын яндырығыҙ. Дүрт ат яҙғы сәсеүгә әҙер булһын”, – тигән кинәйәле юлдарҙың айышын старшиналар тиҙ фәһемләне. Йәғни, үҙ арағыҙҙағы

һатлыҡ йәндәрҙән арынып, ышаныслы ир-егеттәрегеҙҙе һайлап ҡуйығыҙ, артыҡ-бортоҡтан ҡотолоғоҙ, дүрт юл башҡорттарын яуға әҙерләгеҙ, мәғәнәһендәге иҫкәрмә ине был.

“Санкт-Петербург яңы биләмәләргә эйә булмаҡсы, ҡәлғәләр һалмаҡсы”, тигән хәүефле хәбәр раҫҡа сыҡты. Өфөгә килеп төшкән ҙур хәрби экспедиция 1735 йылдың яҙына Ур йылғаһы буйында оло ҡәлғә һалыу өсөн походҡа юлланды. Яуға әҙер башҡорт һыбайлылары экспедицияның Урал тауҙарына еткән драгун полктарына, аҙыҡ-түлек обоздарына һөжүм итте. Ҡанлы һуғыш башланып китте. Оҙаҡламай дүрт юл башҡорттары ла дәррәү яуға күтәрелде. Нуғай юлының Килмәк абыз менән Аҡай батыр яугирҙары Ағиҙел буйлап хәрби экспедицияның башлығы статский советник Кирилловтың төп отрядтарына сапҡын яһаны. Себер юлында Йосоп батыр етәкселегендәге башҡорттар хәрби ылауҙарҙың юлын киҫте, Әй һыуы буйында Тевкелев карателдәре менән һуғышты. Икенсе йылында ихтилал йәнә ҡыҙыбыраҡ китте.

Мәғлүм, бөтә ил-йорт ҡупҡан яуҙан ҡотолоп ҡалыу ҡыйын. Ғәҙәттә, һатлыҡтарҙы юҡ итергә тырышалар, ҡарышҡандарын ҡыйраталар, икеләнгәндәрен яуға күтәрелгәндәр барыбер үҙҙәренә эйәртәләр. Ир-ат эйәр өҫтөндә булырға тейеш. Йә теге, йә был яҡта.

Ғәййәр ир-егеттәр яуға сыҡҡанда әйле башҡорто Туйгилде тегеләйтеп-былайтып яу-ялҡындан ситтә ҡалды. Күп бала-сағалы, йүнле атфәләне лә юҡ ябағай йорт башын йәлләгәндәрҙер ҙә, бәлки. Үҙ нужаһы башынан ашҡан. Ил ҡайғыһымы ни унда?

Башҡорт иле өҫтөнән икенсе йылды айҡап үткән утлы дауылдан да боҫоп ҡына ҡалмаҡсы булды, ахыры, Туйгилде. Ләкин был юлы яуҙың хәтәр ялҡыны Туйгилде йортона ла ҡағылды: карателдәр ғәйепһеҙ бәндәнең бала-саға менән тулы өйөн үртәп киттеләр. Үҙен ауылдаштары, яуҙа һәләк булғандар урынына, көсләп өҙәңгегә баҫтырҙы. Хәйер, Хоҙай бирәм тигән ҡолона, сығарып ҡуйыр юлына, тигәндәй, был юлы ла еңелерәк ҡотолдо Алла бәндәһе: тәүге алышта уҡ аты яраланып, үҙе бер генә уҡ та ата алмай, яуҙан айырылып ҡалды. Ҡалыуын ҡалды, барыбер эләкте, бахырың. Батшаға ҡаршы яуға сыҡҡан тип, хөкөмгә тарттырҙылар үҙен. Китте тикшереү, китте эҙәрләү.

Шул йылды, башҡорттар яңынан баш күтәргәс, Урал заводчиктары башлығы Василий Никитич Татищев төп резиденцияһы Екатеринбургтан ғәскәре менән Башҡортостанға йүнәлергә мәжбүр булды. Өйәҙ ҡалаһынан әллә ни алыҫлашмай, түрә Ҡыҙыл Таш тигән ҙур күл буйына туҡталды ла, шунда нығытма ҡороп, отрядтарын берәм-берәм башҡорт араһына ебәрергә йыйынды. Ниәте ғәскәрен ут эсенә индереп, боланы ҡорал менән генә баҫтырыу, самаһыҙ ҡан ҡойоу түгел, төрлө мәкер, хәйлә ҡороп, башҡорттарҙы буйһондороу, тынысландырыу ине. Сапҡындары аша боласы башҡорттарға хаттар таратты, төрлө вәғәҙәләр бирҙе, ярлыҡарға теләген белдерҙе. Ниәт үҙенекен итте. Болаға ылығып өлгөрмәгән түрә-ҡараны аҡса, мал менән әүрәтеп, үҙ яғына ауҙарҙы. Аҙаҡ инде Ҡөръән тоттороп ант иттереп, үҙенә тамам беркетеп ҡуйҙы.

Әммә болала ҡатнашыусыларға ҡарата аяуһыҙ ине Татищев. Яу башлыҡтарын, даусыл старшиналарҙы, ил батырҙарын, танау-ҡолаҡтарын киҫеп, язалап, алыҫ каторгаларға һөрҙө. Ырыу-тоҡомдарын ҡоротор өсөн, биләмәләрен алпауыттарға һатты, суҡындырып христиан яһаны. Балаларын шулай уҡ суҡындырып, берәм-берәм урыҫ губерналарына таратты. Әгәр абруйлы старшинаны бер юлға ярлыҡаған икән, бер-ике балаһын аманат итеп Екатеринбургҡа оҙатты. Баш һалып килгәндәрен ярлыҡаған тәҡдирҙә лә, штраф итеп аттарын ҡайырып алды, Ҡөрьән тоттороп ант иттерҙе. Оло яза-ҡазанан ҡотолғанға күптәре шат ине: баш һау булһын, малы табылыр.

Туйгилденең хәле мөшкөл ине. Түләп ҡотолорға аты юҡ, түрәне тартыр исем-заты юҡ. Торғаны бер байғош. Бер мәл тотҡон Туйгилдене Татищевтың ҡаршыһына килтереп баҫтырҙылар.

— Йә әле, пленный Юлаков, яуап бир: ни өсөн батшаға ҡаршы баш күтәрҙең? – тип һорау ҡуйҙы Василий Никитич.

Һорауын тылмас башҡортса ҡабатлағас, Туйгилде ҡурҡа-ҡурҡа телгә килде:

— Баш түрә, мин баш күтәрмәнем. Мине ҡурҡытып, көсләп алып киттеләр. Тәү бәрелештә үк атым үлеп, үҙем ҡасып ҡотолдом.

Тәржемәсе яуапты руссаға әйләндергәс, Татищев баш сайҡап торҙо:

— Ай-һай, үҙеңдең баш аяулы икән. Яуҙан ҡасҡанһың, ә? Был дезертирлыҡ була түгелме һуң?

— Мин яуға, дауға ғөмүмән ҡаршы. Миңә бер ни кәрәкмәй.

Һәләмә кейемдә, меҫкен ҡиәфәттә баҫып торған әсиренә сәйерһенеп ҡарап тора-тора, Василий Никитич ҡырҡа өндәште:

— Вот что, Туйгильде, или заплатишь штраф лошадью или твоей башке каюк.

Тылмас әйләндергәнсе үк уҫал һүҙҙең мәғәнәһен самалағайны инде әсир. Шул саҡ һиҫкәндереп ишек асылып китте. Берәүҙе эскә тотоп индерҙеләр. Башы-күҙе ҡара янып бөткән, күлдәк-ыштандары теткеләнгән тотҡон ине. Туйгилде сырамытты – Хәлил ауылы башҡорто Ҡыйпанай бит был.

Иғтибар Ҡыйпанай батырға күсте. Түрәнең төҫө ҡомһораны.

— Һуңғы һүҙеңде әйт, пленный вор: йә баш бурың Йосоп Арыҡовты тотоп килтерәһең, йә үҙ башың менән хушлашаһың!

— Үҙ батырын тотошҡан кем булыр ине, начальник? Хыянатсы итмәксеһеңме? Булмаҫ. Беҙ, баш йәлләһәк, яу асмаҫ, өйҙә боҫоп ятыр инек...

— Аҫырға! Ғибрәт өсөн тотҡондар алдында аҫырға!

Тотҡондо этеп-төртөп алып сығып киттеләр.

— Йә, Туйгилде, һине лә шул яҙмыш көтәме? — Әйтһәм әйтәйем, һиңә ҡотолоуҙың берҙән-бер генә әмәле бар. Христиан диненә күсеү, әҙәм булып таҙарыныу. Гонаһтарыңды юйыу. Шунан башҡа сара юҡ.

Татищевтың тәҡдимен тылмас аңлатҡас, Туйгилде бер килке аптырабыраҡ торҙо. Мейеһенән йәшендәй уйҙар йүгереп үтте: эйе, ишет-

кәне бар, христиан диненә күскәндәрҙе енәйәттәренән дә ҡотҡаралар икән, тип. Йәне һатылһа ла, тәне иҫән ҡала. Бисәһе, бала-сағалары, хатта йорт-ҡураһы ла юҡ хәҙер. Ғаиләһе кемдәрҙәлер өйҙәштер, ялсылыр… Хәйерсе ғүмер…

Уйланғанын, сырайы асыла төшкәнен күреп, Татищев тотҡондоң күңелен үҫтерергә ашыҡты:

— Крещение үткәс тә үҙеңә, Туйгилька, йәшәр өй табырбыҙ. Ғаиләңде килтерерһең. Үҙеңә, ҡатыныңа, балаларыңа берәр ҡат кейем, аяҡ кейемдәре бирербеҙ. Аҡсалата ярҙам булыр. Льготалар буласаҡ. Әҙәмсә йәшәп китерһең ғаиләң менән. Ниндәйҙер Туйгилька Юнаков басурман түгел, настоящий православный булып. Мәҫәлән, Трофим Юркиньев сын. По-христиански...

Түрә йөҙө яҡтырып һөйләй, керәшен тылмас, ахыры, тағы матурлап, тәмләп аңлата – ни ҡөҙрәт был – тотҡондоң да тотҡонлоғо юйылып бара, йөҙөнә нур йүгерә, эсенә йылы инә. Ысынлап та, яза-яфанан, әжәлдән ҡотолоп, әрәм булдым тигәндә әҙәм булып китәсәк түгелме ни? Дине өсөн түгел, көнө өсөн. Үҙе өсөн түгел, балалары хаҡына…

Бер һөйләшеүҙә тотҡондоң ризалығын алды Василий Никитич. Бер мосолманды христиан итә бит. Христосы ҡаршыһында, бәлки, өймә гонаһтары ярлыҡалыр. Белһендәр, тейеш сағында күңеле лә йомшаҡ, игелекле лә Василий Никитичтың!

Ҡыҙыл Ташта бар гарнизонын, христианын, мосолманын йыйып, хатта һаҡта ятҡан тотҡондарын да сығарып, Туйгилдене суҡындырыу церемонияһын еренә еткереп уҙғарҙы. Үрмәксенән күрмәксе, шуның артынса йәнә өс тотҡон христиан диненә күсергә күнде.

Туйгилде, хәҙер инде Трофим Юркиньевич, — ирекле ҡош. Осоп тигәндәй ҡайтһа, ни ишетһен, ҡатыны Аҙнабикәһе менән оло улы Мөхәммәтен әсир итеп ҡайҙалыр алып киткәндәр – ғәйептәр. Ике кесе улы — ун йәшлек Мәргәне менән һигеҙ йәшлек Әлкәйе лә юҡ. Улдарын аҙаҡтан Исәт провинцияһына, ниндәйҙер приютҡамы оҙатҡандар, ҡалған өс улы ла кеше ҡулында ялсы.

Аҙнабикәһен, балаларын эҙләштереп, һораштырып, өйәҙ түрәләренә яҙыштырып ҡарау ҙа бер ни бирмәне, ғәйеп тә ғәйеп. Ҡалған өс улы – ун алтыһына сыҡҡан Яҡшығоло, ун дүрттәге Ҡотлобайы, ун икеләге Яҡшыбайы менән бергәләп элекке нигеҙендә, көл-күмер ятҡан урында мең бәлә менән кескәйерәк өй күтәреп инделәр, кәртә-ҡура ойҡаштырҙылар. Туйгилде үҙен ауылында әтәмбәйҙәй, ала ҡарғалай тойҙо. Суҡынған әҙәм – керәшен икәнен белгән ауылдаштары ят итте. Диненән яҙған, суҡынып аҙған әҙәмгә ни һан? Тауҙар вәғәҙә иткән түрәләре, поптары суҡындырҙы ла онотто. Бар ни уларға Туйгилде-Трофимың, юҡ ни.

Йән тынысһыҙлығы ҡыйҙы Туйгилдене. Тәре тигәнен, йәшереп мөйөшкә ҡуйған иконаһын йәне һөймәне. Ун ике саҡырымдағы урыҫ ауылына сиркәүгә рождество, пасха, Петров день, бүтән христиан байрамдарына ғибәҙәткә барырға мәжбүр булды. Поптары ла үҙ керәшенен һаға-

йып күҙәтә. Өйҙә етеп килгән улдары алдында суҡыныуҙары, ”боже мой”, ”помилуй”ҙан һалдырып уҡыныуҙары нисектер бик яйһыҙ, оят ине үҙенә. Суҡынмыш керәшенгә бисәлеккә килергә теләүсе ҡатын-ҡыҙы ла табылманы. Ир тип кем иманын һатһын инде? Ләғнәт татыһынмы?

Ауылдаштары Туйгилдене телдән дә, эстән дә ләғнәтләйҙәр ине. Ят бауырға, динен һатҡан әҙәмгә әйләнгәс ни, үҙенә үпкә. Ҡайһылары йәлләштерәләр, ҡыҙғаналар ине лә шикелле. Ҡоро ҡыҙғаныуҙан ни файҙа, күңел йылыһы булмағас?

Әҙәмдәр аңлап бөтмәй шул кешенең йән ғазаптарын. Әхирәтен уйлап, күпме йоҡоһоҙ төндәрен уҙғара инде Туйгилде. Көнө тип диненә хыянатын Аллаһы тәғәләһе мәңге кисермәç, үҙе тамуҡтың иң төбөндә яныр кеүек. Ярлыҡай алһа икән Хоҙайы.

Ниҙер булды, аңлымы, аңһыҙмы, бер саҡ Туйгилде улдары алдында суҡыныуҙан тыйылды, боже-фәләндәрен ысҡындырманы, күлдәк эсенә таҡҡан тәреһен ҡайҙалыр йәшерҙе, икона ла мөйөштә күренмәне. Аратирә бисмиллаһын, мосолман доғаларын әйткеләй башланы. Хатта йәшереп кенә намаҙ уҡыштырырға тотондо. Шулай итеп, ул эстән дә, тыштан да бар күңеле, рухы менән кире хаҡ мосолманға әйләнеп бара ине. Тора-бара сиркәүгә йөрөүе лә һирәгәйҙе, аҙаҡ тамам туҡтап ҡуйҙы. Йәнде икегә бүлеп, ике Аллаға табынып йәшәп булмай торғандыр.

Унын йәшерен генә муллаға барып, тәүбәгә килеп, кире исламға күсеүен һис кем белмәне, әлбиттә. Мулла доғаһын алып ҡына түгел, ҡан тамырын асып, ҡырҡ тамсы ҡанын ергә тамыҙып, йәғни алама ҡанын сығарып, ярлыҡамыш доғаһын йөҙ тапҡыр ҡабатлатты: ...әшһәүәд әллә илаһи иллаллаһ вә әшһәдү Мөхәммәден абдуһу вә Рәсүлүһ... Төшөндө: Аллаһы тәғәлә, мин ихтыярһыҙ бәндәңде ярлыҡа, көсләү арҡаһында ғына мин динемдән яҙҙым, ярлыҡа, илаһым, Мөхәммәт рәсүлулла, тип ялбара ине ул.

Бер көндө оло улы Яҡшығолона тураһын әйтте.

— Улым, һин хәҙер егет ҡорона индең. Хәлемде аңларһың. Донъя хәлен белеп булмай, бер нисә ғөзөр-үтенесемде әйтеп ҡуяйым.

— Хәлеңде, хафаланғаныңды күреп-белеп йөрөйөм, атай.

— Эш күреүҙә генә түгел. Көн, донъя тип иманымды алыштырҙым. Йәнәһе, ғаиләм, балаларым хаҡына. Тик йән тыныслығы таба алманым. Дине христиан, көнө ристан хәленә ҡалды. Үҙем, күңелем хәҙер яңынан мосолман. Үтенесем шул: әсәйеңде, туғандарыңды онотма. Эҙһеҙ юғалырға сүп түгелдәр бит. Уларҙы Себер драгун полкы башлығы Арсеньевҡа тапшырғандар. Еп осо шунда. Минең хат-юллауҙарға ләммим яуап бирмәне. Һиңә киләсәктә, бәлки, юл төшөр. Табырға тейешбеҙ уларҙы...

— Атай, берәй ййы сыҡҡанда миңә Шадрин ҡалаһына барырға кәрәк. Полковниктың үҙенә.

— Эйе, шунһыҙ булмаç. Тағы ла шул, улым: ҡорҙан, йәмәғәттән ситтә булмағыҙ. Ни күрһәгеҙ ҙә халыҡ, ил-йорт менән бергә күрегеҙ.

Минең бер оло яңылышым шунда – ил-йорттан ҡырҙараҡ булырға тырышыуҙа.

Туйгилденең шиге уйлағанынан яман килеп сыҡты. Сиркәүгә йөрөүҙән туҡталған башҡорт керәшенен поп башта үҙе саҡырып ҡараны, килмәгәс, оло башын кесе итеп, үҙе килеп төштө, өгөтләне, ҡурҡытты, янаны, әммә бер ни ҙә сығара алманы. Попҡа мосолман араһында йәшәгән бер керәшенен, православныйҙы йүнләп белмәҫ һәм уларға ылыҡмаҫ бер бәндәһен онотorға, иҫәпкә алмаҫҡа ла була ине, әлбиттә. Берәү артыҡ ни, кәм ни, кемгә хәжәт? Юҡ шул, әллә побының иң яманы булды, Туйгилдегә талпандай ҡаҙалды. Ҡаныҡҡас ҡаныҡты: түрәләрҙең иң ҙурына, Татищевтың үҙенә олоғара ялыу ебәрә. Ҙур түрә ҡаты һеперә: “вероотступникты” ҡулға алырға, бар ғәләм алдында терелэй яндырып үлтерергә.

Хоҙай ҡәһәрелер, Туйгилденең үҙенең, ҡалған улдарының яҙмышы йәнә баяғы Арсеньев ҡулына тапшырыла. Улар ҡулға алына, Екатеринбург ҡалаһына язаға оҙатыла. Нигеҙ икенсе тапҡыр тарҡала, ғаилә язаға тарттырыла. Әммә быға ауылдаштарының артыҡ иҫе китмәне, ахырыһы: иманын һатҡанға Алланың ҡаты ҡарғышы төшкәндер.

...Яҙғы бысраҡта тау-урман юлдарын кисеп, дүрт бәйле тоҡон ултырған ике оҙон, ҡаҡ арба бына нисәмә көндәр инде бата-сума, шағыр-шоғор тәгәрәй ҙә тәгәрәй. Уларҙы оҙата барған күсере, эргәләге ҡоралды ҡарауылсыһы, һыбайлы гренадеры йонсоп бөткән. Үҙҙәре арыған, арыҡ аттары саҡ тарта. Тотҡондарҙы әйтеп тораһы ла түгел, улар аслыҡтан, һыуыҡтан миктәп ҡорошҡан. Көнөнә ус айаһындай икмәк киҫәге, бер көрөшкә һалҡын һыу бирһә бирәләр, бирмәһәләр юҡ. Ҡоро йәндәре, ҡалтыр тәндәре ҡалған. Өҫтәрендә бишмәт тә, аҫтарында ыштыр, ябынырға алама септә. Улары ла берсә еүешләнеп, берсә туңып ҡатып, йылы тотмаҫ хәлгә килгән. Ата кеше ни булһа ла түҙер, ғәйепһеҙ улдары, быуындары ла ҡатып етмәгән балаҡайҙары йәл. Хоҙайы ҡарғышын үҙенә генә төшөрһә һуң...

Кистәрен берәй ауылға ҡунырға туҡталғанда ла, һаҡсылары йылы өйҙә йоҡлаһа, былар урыны – һалҡын келәт тә мал ҡураһы. Ишектәрен бикләп алалар ҙа эш бөттө: яҙғы ҡара һыуыҡта туң да үл. Шуға керпек ҡаҡмай өҙләкһеҙ йөрөп, тапанып сығырға, бер-береңә һыйынып йә айпашып туңмаҫҡа тырышыла. Әлдә малайҙары ныҡ, аслығына ла, һыуығына ла аяҡ һуҙып бармай.

Оҙон бысраҡ юлда еүештән ойоп барған еренән Туйгилде үҙе ултырған арбалағы уртансы улы Ҡотлобайына, ҡалтыранған кәүҙәһен йылытырға теләгәндәй, йылышып, һаҡсы күсерҙең йоҡомһорауынан файҙаланып, бышылдабыраҡ һөйләп китте:

— Улым, хәҙер беҙ бергә булып һөйләшер ваҡыт та булмаҫ, бергә лә тотмаҫтар. Әйтәйем әле һуңғы һүҙҙәремде. Ағайыңа ла, энеңә лә еткерерһең. Мине кафырҙар барыбер язалар. Хоҙай ҡәһәренән ҡотолмаҡ сараһы юҡтыр. Һеҙгә йәшәргә яҙһын. Атайығыҙҙы ҡарғамағыҙсы. Үҙегеҙҙе ни яҙмыш көтәлер — ярлыҡарҙармы, ҡол итәрҙәрме? Йәнегеҙҙе, иманығыҙҙы һатмағыҙ! Һеҙҙе бер-берегеҙҙән айырырҙар инде ул. Ныгы-

нып китһәгеҙ, бер-берегеҙҙе табышырға тырышығыҙ. Әсәйегеҙҙе табығыҙ. Бүтән йүнләп һөйләшә алмаһаҡ, бәхил бул, атайыңа яман рәнйемә...

Улы һүҙһеҙ баш ҡағып, әллә өшөүҙән, әллә күңеле тетрәнеүҙән, ҡалтырана-ҡалтырана тыңланы ата һүҙҙәрен. Атаһы унын ҡалтырауын үҙ тәне менән тойоп барҙы.

Екатеринбург тигәндәре яҡыная, ахырыһы: юлдар бер аҙ киңәйә, таҡырая төштө. Аттар ҙа хәҙер еңелерәк тарта, күсәргә етер бысраҡтар артта ҡалды. Күсер ҙә юлы арыуланыуға кинәнеп, аттарҙы үҙ яйынараҡ ҡуйып, гел йоҡомһорап бара, һыбайлылары ла эйәр өҫтөндә ойой. Донъяһы тып-тыныс. Ҡош кеүек осоп кит ине, ҡул-аяҡтары бәйле шул. Бәй, иртән иренеп, унан-бынан ғына бәйләп ултырткайнылар түгелме һуң? Ҡулдарын тартҡылағайны, бауы бушаны. Бер осон табып, теше менән систе, бәйенән бушанды. Аяҡ бәйенән дә ҡотолдо. Ҡарай, бер һыбайлыһы алда, икенсеһе иң артта. Күсере серемгә талған. Күҙе төштө: билендәге балтаһы арҡаһына ауышҡан. Уйланып өлгөрҙөмө-юҡмы, Туйгилде йәһәт кенә балтаны тартып алып, тегенең соңҡаһына һуҡты — эйелде-төштө. Арбанан һикереп, тура урманға һыпырҙы. Уңарсы гренадеры шәйләп ҡалды, күрәһең, һөрәнләп артынан ҡыуғаны ишетелде. Урманға еттем тигәндә, елкәһенә килеп йәбеште был. Балта менән һелтәп ебәрҙе, әммә көслө йәш һалдат аслыҡтан тамам ҡырҡылған хәлһеҙ тотҡондо тиҙ бөктө. Алышырлыҡ, көрмәкләшерлек тамсы хәл генәһе юҡ ине әсирҙең. Ул арала икенсе һыбайлы килеп етте. Ҡулын ҡайырып бәйләнеләр, арбаға илттеләр. Илтһәләр, улдары юҡ – ҡасҡандар. Береһе эҙләй китте, икенсеһе ҡарт тотҡондо һаҡлай ҡалды. Ата кешене туҡмай-туҡмай, улдарын саҡырырға бойорҙолар. Атаһына үлем янағанын аңлапмы, оло улы урмандан сыҡты, былар янына үҙе килде. Күпме һөрәнләһәләр ҙә, бүтәндәре сыҡманы.

Шулай дүрт тотҡон урынына икәүһе менән, ҡоралллы һаҡсылар, һыбайлылар үҙҙәре яралы көйө Екатеринбургка килеп инделәр.

Екатеринбург төҙөлөүенә бары 15—18 йылдар ғына үткән булһа ла, хәҙер ул ҙур өйәҙ үҙәге. Урал, Себер тау заводтарының идараһы шунда урынлашҡан. Нигеҙләүсеһе тип Василий Татищевты иҫәпләйҙәр.

1738 йылдың 20 апреле. Ҡаҙна йорттары, идаралары, Успенский сиркәүе, казармалары менән уратылған ҙур майҙанға хисапһыҙ халыҡ йыйылған. Һыбайлы гренадерҙар, һалдаттар байтаҡ. Офицерҙары ла күренә. Таш сиркәү ҡаршыһы гел ҡаранан кейенгән һаҡаллы поптары менән тулғаны. Урыҫ православныйҙары араһында татар, башҡорт керәшендәрен айырырға мөмкин. Һуңғыларын төрлө төбәктәрҙән ғибрәт өсөн махсус рәүештә йыйып килтергәндәр, күрәһең. Тамаша ҡылырға йыйылғандар ҙа етерлек.

Был хәтлем күп халыҡ тупланышын оло майҙандың быҒаса күргәне юҡ, ахырыһы. Әйтерһең, бөтә ҡала, аяҡҡа баҫҡаны, ултыра алғаны — бары шунда.

Майҙан ғәләмәт дәү йән эйәһе кеүек геүләп, ҡымырйып тора. Сиркәү яҡлап асыҡ ҡалдырылған урында таҡта күтәрмә. Эргәһендә әрҙәнә утын өйөлгән. Уртаһында тимер бағана. Йәғни, былары язалау урыны.

Бер саҡ сиркәү ҡыңғырауҙары саңы яңғыраны ла тымды. Шул мәл ҡулдары артҡа шаҡарып бәйләнгән, муйынына яҙыулы таҡта тағылған, битен һаҡал баҫҡан Туйгилде, уға штыктар терәгән һалдаттар күренде. Төркөмдө йырып, әлеге урынға үттеләр. Офицер Туйгилдене ҡалҡыу урынға мендереп баҫтырҙы, түбәндә һалдаттар уратып теҙелде. Шул арала майҙан бер ҡат шау-гөр итеп алды, төрлө тауыштар ишетелде.

Туйгилденең муйынындағы таҡтаға “Вероотступник” тип яҙылған икән. Монахтар, тағы ҡаранан кейенгән кемдәрҙер төркөмөнән ләғнәт ауаздары яңғыраны:

– Антихрист!

– Ирод! Басурман!..

Алдағы рәттәр бер туҡтауһыҙ суҡынды, ләғнәт һүҙҙәре яуҙырҙы. Керәшендәр тауышһыҙ суҡыналар ине.

Шул шау ҡаршыһында Туйгилде хәлһеҙ башын эйеп байтаҡ баҫып торҙо. Бары геү генә ҡолағына ишетелә ине шикелле.

Бына күтәрмәгә оло кәүҙәле поп күтәрелде. Уға дьягы эйәргән. Туйгилде янынараҡ барып, майҙан уртаһына төбәлеп, дьяк ҡулындағы ҙур ҡағыҙҙы уҡый башланы. Майҙан тып-тын ҡалды.

— Указ главной горной канцелярии. По указу сия императорского величества самодержицы всероссийской и по определению его превосходительства тайного советника Василия Никитича Татищева, велено тебя, башкирца Тойгольду, за то, что ты крестясь в веру греческого исповедования, принял паки магометанский закон, и тем не только что богомерзкое преступление впал, но яко пес на свои блевотины возвратился, и клятвенное свое обещание, данное при крещении, презрел, чем Богу и закону Его праведному учинил великое противление и ругательство – на страх другим таковым, кои из магометанства приведены в христианскую веру, при собранных всех крещенных велено казнить смертью – сжечь.

Дьяк ошонда еткәндә тынып торҙо, ә шул мәлдә майҙан бер тындай гөр килеп ҡуйҙы. Тик керәшендәр генә тып-тын. Хөкөм ителеүсе Туйгилде үҙе бер ни булмағандай тыныс кеүек. Ул, гүйә, мәңгелек уйға батҡан, ойоп китҡән. Юҡ, үҙенә аңлайышһыҙ телдең мәғәнәләре аңына барып етмәгәс, ул тын ғына майҙанды күҙәтә ине, шикелле. Ул алға сығарып баҫтырылған ике улына төбәлгән ине. Кесеһе юҡ икән. Улдары менән мәңгегә бәхилләшә ине ата.

Ә дьяк һаман уҡый:

— Тойгольда, по злой изменнической совести, ведя себя уже и не на воле, а под караулом, как везли сюда, дорогою, вымысля коварственно, украл у извозчиков топор и тем внезапно посланных за ним конвойных Сибирского драгунского полку двух человек гренадеров рубил, и у одного перерубил лядунку, а другого руку, и имел намерение к побегу, через что и наивящее злодейство свое проклятие умножил, и не только за оное твое преступление, но и за оне содеянное зло, учинил себя достойно смерти...

Приговор уҡылып бөтөүгә майҙан яңынан геүләне, тағы ләғнәт һүҙҙәре яңғыраны. Тылмас приговорҙы төркисә уҡып ишеттерҙе. Туйгилде үҙе тамам миңрәүләнеп ҡатҡайны инде. Тимер бағанаға сымдар менән сырмағанда ла ҡымшанманы. Сиркәү саңдары ғына юҫыҡ-юҫыҡ ҡолағына сағыла ине.

Берсә геүләп, берсә тыныбыраҡ торған майҙан ут төрткәнде, шыршы, ҡайын ағасының шартлап яныуын, тәүге ялҡын телдәренең Туйгилденең ярым яланғас тәндәрен ялмап-ялмап алыуын шомая-һағая күҙәтте. Ялҡын әҙәм кәүҙәһен баш аша ялмағанда уның, үлемесле тартышып, бер-ике тапҡыр йөрәк өҙгөс ҡысҡырыуын ишетеп-күреп торған әҙәми заттар үҙҙәре шашынып киткәндәй булды. Быға балалар сыйнашы, кемдер, әллә улдары, илашы ҡушылды. Танауҙарға көйөк еҫе уҡшытып бәреп инде. Шул саҡ, ҡорбанын өҙгөләп ташлаған йыртҡыс януарҙай, ялҡын оторо ҡоторона ине. Майҙан торғаны бер мәхшәр.

Дьяк икенсе ҡағыҙҙы уҡый башланы: ”Башкира сыновей, приняв, за убег наказать розгами, и до отсылки, по оне ордера его превосходительства Татищева в русские городы отдать роспискою, кто взять пожелает. Буде же к взятию охотников не будет, держать под караулом, а пропитание иметь милостыню. И для отдачи в Руси охотникам отослать их на судне в Казань, далее в Москву...”

Тарих Туйгилде улдарының яҙмышын белмәй. Бары шуныһы мәғлүм: 22 апрелдә Яҡшығол менән Яҡшыбай Минзәләгә оҙатыла. Йәнә ике көндән өсөнсө улы Ҡотлобай табыла. Ҡамсылап язалағандан һуң, Ҡазан тарафына ебәрелә. Шунан ғәйеп.

## Василий Татищев

Василий Татищев рус дворяндары тоҡомонан. Ул үҙе Мәскәүҙең инженерия һәм артиллерия хәрби мәктәбен тамамлаған. Тәү хәрби юлы Петр Беренсе батшаның Балтик диңгеҙе яғы ерҙәрен яулап алыу, Төньяҡ һуғыштары менән бәйләнешле. Ул Ладога күле, Фин ҡултығы буйҙарын алыуҙа ҡатнаша. Пруссияла, Польшала, Швецияла Петр Беренсенең хәрби-дипломатик делегацияларында ҡатнаша. Аҙағыраҡ действительный статский советник, тайный советник исем-дәрәжәләренә эйә була. XVIII быуаттың тәүге яртыһында Уралда тау заводтары һалыу, руда сығарыу, тимер иретеү эштәре йәнләнгәс, уға ҡаҙна тау заводтары менән идаралыҡ итеү вазифаһы йөкмәтелә. 1721–1723 йылдарҙа Татищевтың инициативаһы менән Екатеринбург тау заводы төҙөлә. 1737–1739 йылдарҙа Ырымбур комиссияһы башлығы була. Нәҡ ошо осорҙа тоҡанып киткән башҡорт ихтилалдарын баҫтырыу, етәкселәрен, ҡатнашыусыларын язалау, һөргөндәргә һөрөү эштәре менән шөғөлләнә.

Татищевтың бер резиденцияһы Минзәләлә урынлаша. Кириллов үлгәндән һуң, Урал, Себер тау заводтары идараһы башлығы булыуҙан

тыш, Ырымбур комиссияһы етәксеһе итеп тәғәйенләнгәс, Василий Никитич Яйыҡ буйында төҙөлөп ятҡан яңы ҡалаға күсә.

Уның яман указы менән Туйгилдегә яза әҙерләнеп ғәмәлгә ашырылған көндәрҙә Василий Никитич Минзәләләге ҡаҙна йортонда, май эсендәге бөйөр кеүек, рәхәтлектә йөҙөп, дин, выждан, әхлаҡ хаҡында фәлсәфәләр ҡороп, хыялдарға сумып вайымһыҙ йәшәгән сағы ине. Янына Ҡазандан яңыраҡ тәғәйенләнгән епископ Лука Конашевич килеп төшкән. Камин ҡаршыһында тәмләп кенә гәп һатып алалар, уртлай-уртлай хәмер һемерәләр.

Василий Никитич Татищевтың баш ҡалала тарихсы, ғалим, ҙур мәҙәниәтле зат тигән даны таралған. Хәҙер түрәлек дәрәжәһе ҙур. Уның менән танышыу үҙе бер мәртәбә.

Мәғрифәтле кешеләрҙең һүҙе, әлбиттә, мәғрифәт тураһында.

— Закондар борон-борондан килә, кәттәләре ташҡа уйылған, — әңгәмәһе шулай аға Лука Конашевичтың. – Әммә мәғрифәтселектең нигеҙе — дин!

— Выждан ирке, иман өсөн эҙәрләнеү булмаҫҡа тейеш тә һуң христиан өйрәтеүенсә.

— Әгәр ул выждан, иман тигәнең үҙе булмаһа, шуларҙы уятыу һеҙҙәй мәғрифәтселәрҙең, беҙҙәй дин әһелдәренең эше.

— Сократ, Эпикур хаким заттар кеүек, изгелек эшләп тә яуызлыҡ алһаң, нишләргә?

— Яуызлыҡты изгелек менән еңергә! Мәғрифәт шәмен яғырға!

Тыңламаҡҡа ҡалай хаҡ һүҙҙәр. Ләкин берҙе һөйләп, ғәмәлдә киреһен ҡылғандары ниндәй әхлаҡҡа һыя икән был "мәғрифәт эйәләре" өсөн.

Татищевтың татлы теленә ҡарағанда, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ғәҙелһеҙлектәрен, яуызлыҡтарын тарих күберәк белә. Тәфтишселәр хөкүмәткә ебәргән рәсми ҡағыҙҙарҙа шуны теркәй: "Тайный советник Татищев башҡорттарҙы иҫ киткес ҡыйырһытыуы, һалымдар менән интектереүе сәбәпле баш күтәреүгә еткерҙе. Шуның өсөн ул 1740 йылдың апрелендә Петербургка саҡыртылып, ҡәлғәгә ябып ҡуйылды".

Асылда иһә ҙур түрәнең хөкөмгә тарттырылыуы, ихтилал ҡубыуҙан бигерәк, үҙенең мутлыҡтары, ҡаҙна аҡсаһын туҙҙырыуы, ришүәттәр алыуы өсөн ине. Ә рәсми Рәсәй тарихы үҙ  канһыҙлыҡтарын, Татищев ише түрәләрен дә аҡларға, мәғрүр итергә тырышыр хатта ки. Бына Рәсәй Тулы закондар йыйылмаһы фолианты Туйгилде ишеләр тураһында ни ти: "Замечательно, что в том же самом 1738 году совершилась в столице такая же казнь, какая настигла и Тойгильду: сожжен за переход в иудейскую веру флота капитан-лейтенант Возницын, вместе со совратителем своим жидом Барохом Лейбовым" (Полн. собр. законов, 7, 612-се б.).

Бындай хәл 1743 йылда йәнә ҡабатланыр. Ә илле йылдар әүәл алыҫ төньяҡта, Пустоозеро монастырында атаҡлы протопоп Аввакум утта яндырылып үлтерелгәйне.

Һуңғы ҡәтғи һабаҡ тиһәләр ҙә, тарих ҡабатланып тора, күрәһең. Туйгилде мосолманлығынан яралған бер ҡорбан, үҙ бәндәң. Шуға ла ул Батыршаның рухын нығыраҡ телгеләгәндер, моғайын. Иң аяныслыһы йәнә шул: Батыршаның үҙ тәҡдире хәтәрерәк булыуы ихтимал.

## Мулла кеше

Гәйнә иләүенә, башҡорт араһына имам итеп алдырылды Баһадиршаһ[9]. Илеш мулла ауылына.

Түрә закондары фарман менән, бәндә ҡанундары дарман менән: ун йыл буйы ситтә ғилем тәхсил ҡылып алған имамлыҡтың үҙ ҡанундары булыр, дин-көн тәжрибәһе йәнә үҙ һабағын бирер.

Өфө өйәҙенең Уса юлы Гәйнә башҡорттары сая халыҡ. Улар ҡасандыр көньяҡ тарафтарҙан Кама, Тулва буйҙарына килеп төпләнгән. Был урманлы, тау-ташлы, ҡаҙылма байлыҡлы яҡтарҙа урман кәсебе, һунарсылыҡ, мәғдән сығарыу менән шөғөлләнгәндәр. Игенде, урман төпләп, үҙҙәренә аҙыҡлыҡ ҡына сәсәләр. Ҡырыҫ тәбиғәт, икһеҙ-сикһеҙ киңлектәр халҡын да ҡырыҫ тәбиғәтлерәк, әммә киң күңелле итешкән, күрәһең. Үҙҙәре ғәҙел һәм эшсән ырыу.

Зирәк һәм һынсыл йәш дамелла Батырша быларҙы тиҙ тойоп алды. Хәйер, тыуған яғынан көн ярымлыҡ юлдағы гәйнәләр хаҡында әүәл-әүәлдән күп маҡтау һүҙҙәре ишеткәне бар. Тик аралашҡаны ғына булманы, ә бына яҙмыш хәҙер үҙ араларына илтте. Йәш тип тормай, олоһо ла, кесеһе лә хөрмәт күрһәтте, тормошонда, эшендә хәстәрлек күреште. Емерелеп бөткән мәсетен һүтеп, һиплəп ҡуйҙылар, "мәҙрәсә" лә урынын, рәтен тапты.

Батыршаның иң һәйөнгән көнө — мәҙрәсә асып, яҡты, йылы бинала беренсе һабағын башлап ебәреүе булғандыр. Алдында, күҙҙәрен мөлдөрәтеп, шәкерттәр теҙелешеп ултыра. Шылт иткән тауыш-тын юҡ. Ата-әсәләре лә балаларын хәленсә кейендереп ебәргән. Шулай йөҙҙәре гел аҡ, күңелдәре пак булһын. Рухтарын нурларға, зиһендәрен үҫтерергә яҙһын. Яғымлы тауышы менән ярым көйләп, килештереп әйткән һәр һүҙен шәкерттәре йотлоғоп тыңлап ултырған шикелле, әлеп-бейен, иман-шартын, әфтиәген өйрәтеү, доғаһын, сүрәләрен күндереп алып китеү мулла хәҙрәттәренә бер кинәнес ине. Әҙәм балаһына күп кәрәкме ни, уға бер йылы һүҙең, ғилем орлоғо сәсеүең етә, шунан ҡәнәғәтлек таба, күңеле була.

Һине йәмәғәт кеше итешкән икән, үҙең шуның игелеген икеләтә ҡайтарырға бурыслыһың. Һәр хәлдә, хәлеңдән килгәнсә. Мәҙрәсә һабаҡтары шуның бер башы булғайны.

Йәш көйө ауыл аҡһаҡалдарының, өлкәндәрҙең ихтирамын тойоп, мәсетендә намаҙына ойотоп, ураҙаларында, ҡәҙер кисәһендә, ҡорбан

байрамында, мәүлит көндәрендә матур маҡам менән Ҡөрьән сүрәләрен уҡып, тәкбирҙәрен әйтеп ебәреүҙәре, мөьминдәрҙең йөҙҙәре яҡтырып, рухтары нурланып киткәнен шәйләүҙәре кинәнестең кинәнесе түгелме ни? Сабыйға исем ҡушаһыңмы, йәрәшкәндәргә никах уҡыйһыңмы, бәғзегә атап Ҡөрьән бағышлайһыңмы, кемделер һуңғы юлына оҙатып ясин сығаһыңмы – әҙәмдең рухы менән бағлы рухани ғибәҙәттәр бит һәммәһе. Йола, ғибәҙәтенә күрә сауабы, саҙаҡаһы, ғөшөрө, зәкәте. Хеҙмәтенең әжере донъялыҡта ла.

Муллаға ылау сираты булмаһа, байрамдарында ҡунаҡ сираты бар. Йәш мулла урыны мәсеттең үрендә икән, өйҙөң һәр саҡ түрендә. Унан башҡа дини байрам, туйҙар башланмай. Мулланың һүҙен генә түгел, үҙен, һәр ҡылыҡ-фиғелен ҡыҙығып күҙәтеп тора йәмәғәт. Яңылыш әйтмәйме, яҙа баҫмаймы. Йәш имамға имамлыҡтарын еренә еткереп атҡарыуҙары ҡай саҡ бик еңел дә булмағандай, йәшлек дәрт-дарманын ауыҙлыҡлауҙары, ай-һай, анһаттан да түгелдер, шәй. Хоҙай бәндәһен бер һынар ҙа, муллаһын ун һынар, ти. Дин ҡанунына бирешмәгәндә лә, көн һынауына бирешеүең бар шул. Көнөтөнө намаҙ өҫтөндә генә ултырып, ғәуам араһында бары ғибәҙәтфарызын ҡылып ҡына йөрөп булмай бит. Әҙәмдең дә төрлөһө бар: диндары, тинтәге, бүтәне. Ихтыярһыҙҙан йәш-елкенсәк араһына ла эләгәһең, уйын-көлкө уртаһында ла ҡалғылайһың. Мулламын, дамелламын, тип баш баҫып, тиҫбе тартып тороп ҡына ҡара: түбәтәй, тиҫбеләрең әллә ҡайҙа осоп китмәгәйе. Шайтан ҡотҡоһона төшмәгәйең, тәүбә, тәүбә. Һаҡланғанды Хоҙай һаҡлармын тигән дә, ә дәрт-дарманды ҡалай баҫырға?

Бер, шулай, яҙ көнө ер-һыу кипкәс, ауыл йәштәре тауға сыҡты. Тау тип, ауылдан әҙ генә ситтә бейек тумалаҡ түбә инде шунда. Шунда йәштәр, олораҡтары ла ҡушылып, йыл һайын уйын ҡоралар икән. Ҡыш буйы томаланып ятҡан өйҙәренән, ҡар-көрттәр ҡаплаған ҡураларынан сығып, яңы һурыҡҡан иркен түбә битләүендә, ялан биләнендә күңел асып, бер ирегеп ҡайталар. Йәштәре төрлө уйын ҡороп зыҡ ҡуба, килен-еңгәләр, уйынына ла етешеп, аҙаҡ ҡаҙан аҫып аш-һыу әҙерләй, ир-аттар тамаша ҡыла, ваҡ-төйәк эш-көш таба, сабынлыҡтарын ҡарай, шишмә күҙләүектәрен таҙарта. Танһыҡтан хозурҙың хозуры инде яҙҙың сыуаҡ көнө. Былдай саҡта мулла ла ситтә ҡала алмай. Ҡайҙа ғәуам, ул шунда. Һәр ерҙә күҙ-ҡолаҡ та кәрәк.

Батырша тауға ауылса ғына кейенеп сыҡты. Елән, салмаһын һалып, ҡәҙимсә ҡалғайны, ирәбе кәүҙәле, киң яурынлы мыҡты егеткә әйләнде лә ҡуйҙы. Үҙе ҡырҙа ниндәйҙер иркенлек, сафлыҡ тойҙо, тәндәре яҙылып киткәндәй булды. Түбәнән тирәләй күренеп ятҡан ҡара урмандар, алыҫ офоҡтар уй-хыялдарын елкендергәндәй ине.

Батырша ир-аттар араһында йөрөнө, уларға ниҙер булышты. Әңгәмәләренә ҡушылып, берсә ғибрәтле, берсә ҡыҙыҡлы хәлдәр һөйләп ташланы, бергә көлөштө, күңел бушатты. Дүрт-биш иргә эйәреп, уй-

паттағы шишмәгә төштө. Ташып барған көсөн ҡайҙа ҡуйырға белмәгәндәй, күҙләүекте батҡаҡ-ләмдәрҙән таҙартышты. Тәрәнәйгән шишмә башы төпкөлөнән саф һыуҙың урғыла-урғыла ҡалҡыуын, иплəгән улаҡтан көмөштәй бөрсөкләнә-бөрсөкләнә ағып сығыуын күҙәтте. Шишмәгә, гүйә, яңы йән вә йәм өрәһең. Сылтырауында унын, әйтерһең, тәшәккер ауаздарын ишетәһең. Ағыр һыуҙа монтар юҡ. Шулай ҙа шишмә менән күберәк булышҡан бер ағай бишмәтенең бер еңенән һүренте остоғо өҙөп алды ла "мине тотма, уны тот!" тип ырымлап һыуға һалды, шунан ғына һирпеп ҡулын, битен сайҡаштырырға тотондо, ҡуш усы менән һоҫоп һалҡын һыуын эсте. Быны бүтәндәр ҙә берәм-берәм ҡабатланы. Батырша ла мәжүси йоланы үтәне.

Унан туйры имәнлек тарафына ыңғайлаһалар, бер төркөм ир-егет уҡтан атыш ярышы асҡан икән. Батырша мәрәйгә атышты байтаҡ ҡарап торҙо. Әҙернә, санай йәйәләренән шәп аталар, мәргәндәр.

Батырша санай йәйәһен тәү тапҡыр тотоп ҡараны. Ҡалай һәлмәк. Ян остары ҡарлуғас ҡанатындай ҡайтармалы. Ҡыҙығып, керешен тартмаҡ итте, тарамыш бирешмәне. Йәйәне бөгөрмөн, кереште һуҙырмын тимә. Ҡеүәт, таһыл кәрәк быға.

Лоҡман мәргән муллаларын уҡтан атырға өйрәтергә теләген белдерҙе.

— Мулла ла мәргән булыр микән? – тип көлөштөләр ир-аттар.

— Батырша тигән исем-атын онотмағыҙ, ҡорҙаштар…

Әйткән һүҙ – атҡан уҡ, шул тауға сыҡҡан көндө үк Батыршаны Лоҡман мәргән башта әҙернә йәйәлә күнектерергә лә кереште. Элек йәйә тотҡан ҡул һол тотондо, уҡтары башта ситкә осоуҙан аралаш мәрәйгә лә тейә башланы. Йәш муллаға ҡеүәтте үтескә алаһы түгел ине. Һуңынан Исхаҡ шәкерте менән күнекмәләрҙе дауам итте: уҡһаҙаҡ менән тейен, ҡош-кейеккә һунар сығыр булырҙар аҙаҡ.

Егетлек барыбер үҙенекен итә икән. Йәш-елкенсәк, егеттәргә эйәргән бер-нисә сайғара ҡыҙ-ҡырҡын, ҡорҙаш муллаларын нисектер әүрәтеп, ат сабышына ла ылыҡтырҙылар. Ул да әҙәм балаһы – ауылда мулла икән, ҡырҙа инде егет.

Сер һәм сәйер түгел, гәйнә ҡыҙҙарының саялары егет-еләндәргә тамсы бирешмәҫ. Ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙ был яҡтарҙа ирҙәр менән тиң бесәнен саба, урман эшенә йөрөй. Ауыр эш тип талымлап тормай. Теләһә, ат ҡушаҡлап саба. Егеттәре ут икән, ҡыҙҙары – ялҡын.

Бына шундай һылыуҡайҙарҙың берәгәйлеһе берме өҙҙөрөп баҡҡайны, шаян йылмайғайны, Батыршабыҙҙың тыйнаҡ йөрәккәйен дә ҡымшандырырға етте шул. Вәсүәсәгә иләҫ-миләҫләнә яҙҙы йәш мулла. Яҙығынан Хоҙайы һаҡлаһын.

Унлап һыбайлы егет-елән, ҡыҙ-ҡырҡын йәш мулланы, ай-вайына ҡуймай, атҡа атландырҙылар тәки. Ауыл балаһы, ул кемдән кәм, ат күргәне, сапҡаны, сабышҡаны бар. Һынамаҡсыһығыҙмы? Һынатмай торһон хәҙрәтегеҙ. Ҡарап ҡарайыҡ улай булғас – эсенән шулай уйланы Батырша сәмләнеп.

## Мөслимдә

Йәш мулланың исем-аты үҙенән алдараҡ йөрөнө, буғай. Икенсе йылына уҡ мәҙрәсәһендә шәкерттәре ишәйҙе, балаларын һабаҡҡа күрше-тирә ауылдар ҙа килтерҙе. Ите һиңә, хәҙрәт, һөйәге беҙгә, тиҙәр ине, тик уҡымышлы була алһасы. Тик мәҙрәсәләре бәләкәй ине шул, ҡанат кирмәле түгел.

Уй-ниәттәре фәрештә ҡанаттарына ҡундымы, бер заман Илешкә Урал аръяғы ер-һыуҙар башы Мөслимдән йомошҡа йөрөктәр килеп төштө. Ике мәхәлләле оло ауылдарына имам-хатип, мөҙәрис кәрәк икән. Иләү, ил-йорттары үтенесе – Баһадиршаһ хәҙрәт имаматлыҡ ҡылһын, ҙур мәҙрәсә тотһон. Теләгәненсә ҡул-юл, әжере мул булыр. Арҙаҡлы старшиналарының үҙе атап саҡырыуы. Вәкилдәр һүҙен, вәғәҙәһен йәлләмәне. Нигеҙһеҙ ҙә түгел кеүек. Батырша ишетә-белә: Мөслим атаҡлы ауыл, Мөслим старшина арҙаҡлы уҙаман. Халҡы тырыш, дингә, ғилемгә ижтиһадлы. Ниәтенә ярашлы мөхит – мөслимдәрҙең һүҙҙәрен йыҡмаҙны хәҙрәт. Әле төпләнгән ере түгел, ғаиләһе, йорт-ҡураһы юҡ. Дүрт яғы ҡибла. Урал аръяғына ғына түгел, әллә ҡайҙарға китергә мөмкин. Хөрмәтләп саҡырып, ғилем-фәнүненә киң майҙан асып торғанда айырата.

Ризалыҡ бирһә лә, ҡапылғара ҡупманы. Мәҙрәсә һабаҡтарын өҙмәҫ өсөн, көҙөн уҡытыуын дауам итте, шул арала зирәк Исхаҡ шәкертен хәлфәлеккә әҙерләне. Ҡар ятып, оло юл төшкәс кенә, хәбәр итеп, мөслимдәр үҙҙәре килеп күсереп алып китте. Илештәр, бигерәк тә шәкерттәре, үҙ итеп өлгөргән хәҙрәттәрен моңһоуланып оҙатты. Улар аралары өҙөлмәүен, яҙмыштары тағы ялғанырын белмәйҙәр ине шул әле.

Мөслим – Исәт провинцияһы Тубыл өйәҙенә ҡараған йомошло мишәр ауылы, һырлы башҡорттары еренә ултырған. Йәнәштә һалйыҒуттар. Өфө мишәрҙәренеке кеүек ҡара яҙмыштары былар тоҡомон да әллә ҡайҙарҙан, Волга аръяҡтарынан һөрөлтөп килтергән. Үҙҙәренең башҡорттарҙан батша түрәләре киҫеп биргән, бер ни ҡәҙәрен килешеп алған ерҙәре иркен. Йүнле хоҡуҡ, көн иркенлектәре генә юҡ. Шул уҡ йомошло вазифа башҡаралар – ылыу ҡыуалар, кордон хеҙмәте үтәйҙәр. Төрлө йомош-юл йөрөйҙәр. Кәсептәре – игенселек, малсылыҡ.

Батыршаға әллә ни күнегәһе түгел, шул ҡәҙимге мишәрҙәр. Булһа, бер аҙ ҡырыҫыраҡтарҙыр. Йола-ғәҙәттәре бер, ер-һыуҙары ят.

Мөслим старшина ихласлап ҡаршыланы. Үҙе күпте күргән, олпат, түңәрәк һаҡаллы, өлкән кеше. Абруйы ҙур. Мөслимдең абруйлы аҡһаҡалдары, күпте күргән ир-аттары дин хаҡында ғына түгел, көнкүреш, сәйәсәт тураһында ла һүҙ ҡуҙғатҡылап, хәҙрәттәренең ҡылын тартҡылап ҡарай башланылар.

Мәсеттә берҙән-бер көндө өйлә ғибәҙәте тамамланып амин иткәс тә ауылдың иң өлкән һәм абруйлы аҡһаҡалы һүҙ алды.

— Йәмәғәт, тура дин-көн хәлдәребеҙгә күсәйек әле, — тип башланы ул тороп. — Бик хуш, булаһы имамыбыҙҙың мөбәрәк вәғәзен,

хәҙимле мәсләген[10] ишеттек. Баһадиршаһ хәҙрәттең ғилеменә, ҡәлебенә иманым камил. Хәлбүки, шундай заттан мөьмин бәндәләренең рухын ағартыр, фарызын үтәр вә үтәшер дини вазифаларын ғына түгел, көндәренә лә, йүндәренә лә еңеллек итер ижтиһатын күрге килә. Мосолман һәр йәһәттән ҡурсыуға мохтаж…

Донъя әхүәлдәренә инеп киткәс һүҙ ҡуйырҙы, әллә күпме мәсьәләләр, сетерекле хәлдәр ҡалҡып сыҡты.

Икенсе мәхәллә муллаһы Нурмөхәммәт, баш имамға төбәп, ҡәтғи һорауҙан башланы:

— Мөьминдәр, кем, Баһадиршаһ имам, һеҙгә сөал әйләймен[11]: ҡанса заман булыр икән был изге динебеҙҙе, рухыбыҙҙы хурлау хәлдәре? Урыҫ поп-әрхәйҙәренең ноҡсанлыҡ ҡылмаҡтары, мосолмандарыбыҙҙы көсләп суҡындырмаҡтары? Ана, түбән мәсетебеҙ шул ҡәбех кафыр йәндәр тарафынан һүтелгәндән бирле, яңынан күтәреп ҡуйған булһаҡ та, һаман ҡотайып китә алмай. Керәшендәр өсөн хурын ғынамы, күпме йөгөн дә йөкмәп йөгәнербеҙ? Иншалла, хәҙер арабыҙҙа суҡынмыштар ҡалманы. Барыһы, ана, Далматҡа китеп олаҡты. Ил яманы – маңҡы, дин яманы — оңҡот, ти. Арабыҙҙа бынан ары оңҡотланып динен, иманын һатҡан, тоҡомдаштарына күтәрә алмаҫ гонаһ, хыянат ҡылған бәндәләр була күрмәһен.

— Мишәрҙәребеҙ, ғәйреләребеҙ кордон, әрме хеҙмәтенән ыҙа күрә, – тип һөйләп китте Мәмбәт яһауыл. – Беҙ, йәнәһе, йомошло мишәрҙәр тип маҡтанып килдек, әллә кем булғандай. Тот ҡапсығыңды – һалдат биштәрен! Ярай әүәле яһағынан азат инек ти. Хәҙер, өҫтәүенә, йән башына егерме бишәр тинлек яһағы ла һалынды. Йәғни, мәҫәлән, ҡуш ҡамытын да кейҙерәләр, өнһөҙ ат-хайуанҡайҙай гел тартырбыҙмы икән ни? Имгәнеп, күтәртеп бөткәнсе.

— Батшаны ғәҙел, ҡолдарын ярлыҡай, хәстәрләй, тигән булабыҙ. – Батшаһына тел тейҙергәндәй итте бер ғәйрәтлерәге. – Ә ниңә һуң шул ғәҙеллектәр күренмәй? Әллә һәр янаралдың, ҙур түрәләрҙең үҙ ҡанунымы, үҙ бизмәндәреме? Батша законы боҙола икән, беҙ, уның ҡул аҫтындағылар, ниңә өндәшмәй баш баҫып ятырға тейеш? Эстә генә ҡалмаһа ине ул аһ-зар, барып етһә икән олуғ батшаның үҙенә.

— Ынтылып ҡарағандары ла булды инде ул, кем, Йомаҙил туған. Мәгәр оло түрәләрҙән уҙып кем ғәуам зарын батшаға ирештерә алһын? Золом йоломо шул оло түрәләребеҙҙә, баш янаралыбыҙҙа булыр Ырымбурҙағы. Башҡорт ерендә шикәйәт яҙып, тамға йыйып йөрөгәндәр ҙә булғайны. Нишләне? Оло түрәләр тегеләрҙе тотоп ғәйепле яһанылар, хатта зиндандарға ябып ҡуйҙылар. Бына шунан юлла инде һин ғәҙеллекте.

— Төрлө түрәләргә ярайым, тип ярамһаҡланыуҙар, алым биреүҙәр, майлау-яйлауҙар күпме йотата бәндәләрҙе? Хәрәм мал, аҡса тамаҡтарына арҡыры ла килмәй бит, исмаһам, үҙҙәренең.

— Ылауҙа зыянлаған малды, әҙәмдәр имгәнеүен, драгундарҙың башбаштаҡлығын, эт урынына үлтереп ташлауҙарын белеп, күреп тора-

быҙ. Шундай үлем-яуызлыҡтарға берәй сараһы булһасы. Түрәләр күрмәмеш булалар, шаулай-даулай башлаһаң еп осон йәшерәләр, етмәһә, үҙеңде ғәйепле итергә торалар...

Әллә яңы баш имам һайлау, әллә Мөслим старшина ла булыу форсатынан файҙаланып, әллә ағын-ҡараһын онотоп, ғалим-ғөләмәһе, ярлы-ялпыһы күңелдәрендә йыйылып килгән аһ-зарҙарын, борсоған мәсьәләләрен бер-бер артлы асып һалалар кеүек ине.

Мөслим старшинаның үҙенә лә ҡағылдылар. Оло түрәләренә ярайым, тип, үҙ командаһы халҡын ҡыҫыуын, йәнен ҡыйыуын әйттеләр. Ылау ҡыуыу сиратын боҙоу, яһаҡ мажараларын, бәндәләрен рәнйетеү осраҡтарын һананылар. Нахаҡ бәләләрҙән аралап ҡалыуҙары, йәмәғәт, ҡаҙна ярҙамы өсөн рәхмәт әйтеп һөйләгәндәр ҙә булды.

Донъя әхүәле, үҙ ҡул аҫтындағы команда халҡы хәле тураһында шул хәтле һорауҙар, мәсьәләләр ҡалҡыуға, үҙенә атап әйтеүҙәренә яуап йә аңлатма рәүешлеме, Мөслим старшинаға заруратлан телмәр тоторға тура килде. Хәл-әхүәлде үҙенсә аңлатырға, сәбәп-ғөҙөрҙәрен төшөндөрөргә, ғәуам халҡын тынысландырырға тырышты. Төрлө ауырлыҡтарҙы, юғарынан үҙенә ҡыҫымды, ҡаты әмерҙәрҙе лә йәшермәне. Өфө, Ырымбур тарафы мосолмандарының хәле беҙҙекенә ҡарағанда ла ауырыраҡ, тип ебәрҙе, ғибрәт өсөн байтаҡ дәлилдәр килтерҙе. Мөьминдәренең дин-көнөнә ноҡсанлыҡтарҙы бөтөрөүҙә, Аллаһы тәғәләһенә һығынып, вәлиниғмәт Баһадиршаһ баш имамға ҙур өмөт бағлағандарын бар командаһы, ғәуам халҡы исеменән айырым әйтте.

Баһадиршаһ зиһенле әһел, барыһын да аҡыл ҡаҙнаһына һала ултырҙы. Үҙ аллы ғүмер йомғағының башланмыш төйөнө сырмалып йомарланмаҡ төҫлө ине. Әлеге йыйынға әйләнеп киткән нәмә елдең тыны ғына булған икән. Дауылы һуңыраҡ һиҙҙерҙе.

1747 йылдың тәүге яртыһында аллы-артлы ике указ иғлан ителде. Әрме хеҙмәте өҫтөнә мишәрҙәргә йәнә егерме биш тин көмөш яһаҡ, ә типтәр һәм этәмбәйҙәргә һикһән тингәсә. Әле төҙөлөп ятҡан Ырымбур сик һыҙығына һәр йыл һигеҙ йорттан бер кеше менән ылауын ебәр. Әллә ниндәй ат “пошлинаһы” тағы.

Указдарын килеп уҡынылар. Уҡыу ғына түгел, килгән вәкилдәре яһағын түләүҙе шунда уҡ талап итә башланылар. Халыҡ ҡубып китте. Вәкилен дә, старшинаһын да өтөп алып баралар.

Мөслим старшина, күпте күргән шыма түрә, ҡойроғон һыртҡа һалды. Вәкилгә яһағын үҙе йыйышырға вәғәҙә итте, ә халыҡты төрлөсә йомалап тынысландырҙы. Силәбегә барып, ҙур түрәләр менән һөйләшеп ҡарарға, нисектер ер биләмен арттырыу иҫәбенә яһағын ҡаплатмаҡсы ине шикелле уйы. Кем белә, бәлки, берәр яйы барҙыр. Старшина шул уҡ ваҡытта Батырша менән икәүҙән-икәү генә һөйләшеп, донъя һәм дин, шәриғәт эштәрен килешеп эшләргә, халыҡты бергәләп тынысландырышырға һүҙ ҡуйышты.

Ләкин шомло хәбәрҙәр, дауыл еле кеүек, йыраҡ-йыраҡтан да һиҫкәндереп килеп етә һәм халыҡты ҡуҙғата ине шул.

Себер, Уса юлдарында ҡара болоттар ҡуйырғандай, ара-тирә йәшен саҡҡылары сағылып ҡала. Ишетелеүенсә, йәй уртаһында Себер юлының Мәләгәс ауылында, сирмеше, сыуашы, типтәре, ғәйреләре йыйылып, яһаҡ түләтергә килгән ҡаҙна кешеләрен, шулар менән бергә үҙ түрәләрен дә туҡмап ташлағандар икән. Күп ерҙәрҙә яһаҡ йыйыусыларҙы ауылға ла индермәй ҡыуып ебәргәндәр. Тағы әллә ниҙәр булып бөткән.

Шул йәйҙе, ураҡ аҙағында Гәйнәнән Мөслимгә Сурағол тигән башҡорт дуҫы килде. Батыршаға ул күргән-ишеткән хәлдәр тураһында күп хәбәрҙәр һөйләп китте.

— Себер юлы типтәрҙәре сөмбөләлә Өфө воеводаһы Люткин палкауникка хат илттеләр. Йән башына яһаҡҡа риза түгелбеҙ, ни өсөн икәнен аңлатыр, һөйләшер өсөн бадишаһ император ғәзими йәнәптәренә барырға дүрт юл вәкилдәренә пашпурт бирегеҙ, тип. — Шулай һалмаҡлап һөйләне Сурағол. — Араларында минең ҡорҙашым Миндиәр ҙә бар ине. Хатты Мортаза тигәне яҙған. Илтәләр илтеүен Өфөгә, ҡулына еткерәләр. Палкауник үҙ башына бәлә килтерергә тинтәкме ни? Быларҙы ҡулға ала, ябып уҡ ҡуя. Шулай булырын самалап торған халайыҡтары дау күтәрә. Алдан уҡ һүҙ төйнәп ҡуйғанса, былар Өфө ҡырындағы башҡорттарҙың Ҡаратун тауы янына, Бәрҫеүән һыуы буйында оло йыйынға йыйылмаҡсылар. Һәр тараф үҙ һайланмыш кешеләрен ебәрә. Ләкин йыйылған вәкилдәрҙең күбеһен Айыр Салтай тигән мишәр старшина, командаһы менән һағалап тотоп, әсир ҡылып, Өфөгә оҙата. Шул һатлыҡ йән арҡаһында йыйын булмай өҙөлөп ҡала.

— Типтәрҙәр араһында ҡорбан-фәлән булмағанмы?

— Юҡ шикелле. Эш яуғаса барып етмәгән. Ә бына дүрт йөҙләп ҡоралды сирмеш драгундарға ҡаршы сыҡҡан. Һеҙҙең Ҡарыштан бире, Танып буйында ҡаты орош булған, тиҙәр. Ҡырҡҡа яҡын кеше үлгән, Таныпҡа батҡан тиме.

— Нисек?

— Бығаса яһаҡ түләмәгән халыҡ ризаһыҙлыҡ белдергән, һүҙ киткән. Кемдер бер оҙон теллеһе ҡош осорған: яһағына ҡушып тағы фарманы бар ти, имеш, һәр юлдан мең баш ат. Шул хәбәрҙе ауыл һайын Абдул тигән мишәр таратып йөрөгән. Хатта бер сотниктан яһаҡҡа йыйған аҡсаны һалдыртып алып, халыҡҡа кире тараҡҡан, ти. Шунда бер ҡаты шау-шыу булған.

Батырша был хәбәрҙәрҙе бер кемгә лә тишмәне, үҙе халыҡтың тын алышын белер өсөн ҡолаҡ һалыбыраҡ йөрөнө. Мәсеттә дөйөм вәғәздән ары китмәне. Мөслимдәр яһаҡ хаҡында ризаһыҙлыҡ белдереп әленән-әле һүҙ ҡуҙғатһа ла, хәҙрәт быға артыҡ ҡыҫылманы. Ил өҫтөнән иҫкән елгә тоҡҡар бармы ни, алыҫтағы хәбәрҙәр бында ла килеп етте.

Түрәләре менән аралашҡан, Силәбе тарафтарына йөрөп торған Мөслим старшина, әлбиттә, күберәк белгәндер. Әммә имамы менән әллә ни уртаҡлашып торманы. Бары ҡороҡаҡ, шымбай булып киткәнен тойорға мөмкин ине. Яһауыл-сотниктарын, писарын, башҡа ярҙамсыларын ҡаты тотто. Ғәуам аҙ ғына тел оҙайта башлаһа, түрәләр әмере ҡанун,

беҙ батшаның хеҙмәтселәре, тип кенә ҡуйыр ине. Аштырып ебәргәндә, ҡайҙалыр башырмаһа ла, һүҙе йә ҡаты ҡулы менән урынына тиҙ ултыртыр ине. Түрә нишләһә лә хаҡлы.

Халыҡтың көндәлек хәстәре – йәйен иген иккәне, малын ҡарағаны — ил хәстәренән алдараҡ. Яһағына ла күнер, башты ташҡа ороп йә ҡылысҡа һоноп булмай. Ана, башҡорт күпме даулашып, яулашып ҡараны. Нишләне? Киреһенсә, бөлдө генә. Еренән, иленән, милкенән яҙҙы күбеһе, күпмеһе баш һалды, йән ҡыйҙы. Мишәрҙең эйелгән башын ҡылыс сапмаҫ, хәленсә йәшәр әле. Ғауғалы донъяла сабырыраҡ булыу хәйерле. Шулайыраҡ та фекерләгәндер инде яҙмыштары артынан яңы ерҙәргә килеп ултырған халыҡ. Барына шөкөрана ҡылмаҡ кәрәк.

Имамдары ла гел иленә, диненә, батшаһына тоғролоҡҡа хөтбәләп тора. Нишләһен, ғәуам булғанына күнеп йәшәй бирә: почта ямы ылауын ҡыуа, Ырымбур һыҙығын ҡороша, ҡарауылында тора, малын аҫырай, игенен игә, бала-саға тәрбиәләй – донъя көтмөшө шул. Бынының ғына түгел, баҡыйын уйлайһы бар. Мосолманға, самаһыҙ гонаһтарға батмай, үҙен әхирәткә әҙерләү лазым. Донъя малы – дуңғыҙ ҡаны – аҙҙырырға тора. Күпме йыйһаң да, теге донъяға алып китеп булмай. Диндар әҙәм баҫымсаҡ, тегеһенә-бынығына бағынып йәшәй. Дин ҡушҡанын тота, законына буйһона. Яһағын түләй, саҙаҡаһын, ғөшөрөн бирә. Диндарҙар, аҡһаҡалдар ҡайҙа, ғәуам шунда. Ил-йортҡа эйәрмәй сара юҡ. Хәйер, арала баш бирмәҫтәре, тиҫкәреләре, хатта Аллаһынан йәйәү ҡасҡандары осраштырғылай. Тик улар ғына донъяны емерә алмай: үҙҙәрен бөгәләр, бөгөлмәгәнен һындырып йә бырaҡтырып ташлайҙар.

Мөслимдәрҙе уҫал халыҡ тиһәләр ҙә, күпселеге диндар әҙәм менән Батыршаға эшләүе еңелерәк булды. Мәсеткә халыҡ бик күндәм йөрөй, мәҙрәсәһе тулы шәкерт. Мәхәллә менән мәхәллә араһы ярышыбыраҡ, дин, шәриғәт ҡушҡанын еренә еткереп йәшәргә тырыша, әҙәп-әхлаҡ ҡағиҙәләрен һаҡлай. Боҙғаны ла кеше һүҙенән, фаш булыуҙан ҡурҡа. Диндән дүнгән, әҙәп боҙған әҙәмгә ҡәрйә эсендә иркен йәшәрмен тимә. Ундайҙарға оятынан ер тишегенә инерлек булыр. Булмаһа, ғәуам нәфрәте, ҡарғышы, бәддоғаһы эҙәрлекләр.

Яйлап тәжрибәһе, килер абруйы үҙенекен итә микән, Батырша Мөслимдә үҙен олпатыраҡ тоя башланы. Нигә тотонһа, шул ҡулынан килә, ни әйтһә, халҡы тыңлап тора. Изгелеге изгелек булып ҡайтмаҡта. Шулай ҙа оло табындарҙа, ҡунаҡтарҙа, бигерәк тә туйҙарҙа урыны гел түрҙә булыр Батырша бер уңайһыҙлыҡ кисергеләй: дыуаҙаҡ ҡаҙҙай яңғыҙ, һаман буйҙаҡ. Уйлаһаң, һаҙаған егеткә әйләнде бит инде. Өйләнергә, оҫтабикәле имам булырға күптән ваҡыттыр. Ҡорҙаштары, аҡһаҡалдар ҙа иҫенә төшөргөләй тора.

Бер саҡ имамға күрше Олоғыуыш ауылы Хөсәйен мишәр ҡыҙы Зөлбохарҙы димләнеләр. Егермеһен еткереп, тулышып бешкән ҡыҙ икән. Үҙҙәрен арыу нәҫел-ырыулы, тиҙәр. Ҡыҙҙарын Батырша үҙе лә күргәне бар. Һөймәлекле – күркәм һылыу.

Ҡыҙ байлығы – күркәм холоҡ, ир-егет байлығы – тәүәккәллек, ти. Мәһәр-бүләктәрен әҙерләп, никахтарын уҡып, туйҙы бөтә шартына килтереп, күңелле һәм тәкәллефле йолалап уҙғарҙылар.

Ҡыҙҙың ҡыҙығы – алғансы, ҡатындарҙыҡы – ғүмергә ҡалғансы, тиҙәр. Уңды хәләл ефетенән Батырша. Бер тән, бер йән булып яратышып, донъя ҡороп алып киттеләр. Ир хәстәрле икән, ҡатыны таҫтарлы булды. Ҡулына малай һонғандары хаҡ булған, киләһе йылына тупылдатып малай табып бирҙе. Исем-атын Тажетдин тип ҡуштылар. Исеме есеменә тап килеп, ғаиләнең тажындай булһын.

Мөслимдәр Батыршаны үҙ иттеләр: ғилемлелеге, ғәҙеллеге менән Мөслим командаһы ауылдарында ғына түгел, иләүҙә, күрше һалйығут башҡорттары араһында ла даны киң таралды. Мираҫ тәрикә малын бүлергә булғанда уны әллә ҡайҙарҙан саҡырып алып китерҙәр ине. Бер сығып китһә, ил-йорт, шәриғәт йомоштары менән аҙна-ун көн йөрөп ҡайта торғайны, тәрикә малын бүлешеп, ҡунаҡ-һый, хөрмәт күреп. Һалйығуттар үҙен оло иләүҙәренә имам итеп димләп ҡыҫтаныйлар, һәйбәтләп йорт-ҡаралтыларын һалып бирергә, мал-тыуарын һибә ҡылырға вәғәҙә иттеләр. Ләкин, торған ер яҡшы булһа ла, Батыршаны тыуған ере тарта ине. Шуғалыр ул яңы урында барыбер ныҡлап тамыр йәйә алмағандыр. Мөслимдә йәшәүенә лә хәҙер дүрт йыл тулып килә. Ғаиләле булды, мал-тыуары бар. Тик үҙ йорт-ере генә юҡ.

Һуңғы йәйҙе тыуған ауылы Ҡарышҡа ғаиләһе менән ҡунаҡҡа барғанда Яныш старшина, йәмәғәт үҙҙәренә ҡайтырға, йорт-ерен ҡорошорға, мәҙрәсәне киңәйтергә вәғәҙәләп торғас, ихласлап күнде лә ҡуйҙы. Шунан да яйлы форсат булмаҫ. Ауылдаштары көҙөнә үҙҙәре килеп, өс ылау менән күсереп алып ҡайттылар ҙа киттеләр. Ҡайныһы Хөсәйен эйәртем мал өҫтәне. Бер тыуса, бер ҡонажын ат, һарыҡ, бәрәс, һауым һыйырҙары, егеүле ат — түлләнер йортҡа түлле мал.

1750 йылдың йәйендә Батырша Ҡарышта йәмәғәт ярҙамы, дуҫтары булышлығы менән Бөрөбаш урманынан бураһын буратып, ҙур ғына йортон күтәреп инә алды. Үткән көҙ ҡапылда ойҡаштырылған ситән аҙбар урынына алдағы ҡышына бурама ҡуралары ла өлгөрҙө. Түлле генә малы үрсеп китте. Шул уҡ йылды иҫке мәҙрәсә бинаһы эргәһенә яңыһын һалдылар. Ситтән килеп уҡыр шәкерттәргә мөмкинселек асылды. Ерле ерендә, тигәндәй, Батырша үҙ тыуған ерендә төпләнеп, иркен генә йәшәп алып китте.

## Яныш старшина

Яныш старшина менән башта дуҫ ине Батырша. Ауылдаштар йәшләй үк яҡын. Яныш өлкәнерәк булһа ла, яҡшыһын-яманын бергә күреп үҫтеләр. Атаһы арҡаһында старшина булып, хоҡуҡтары үҙендә тәҡдирҙә лә, Янышҡа ла Батырша ише шөһрәтле дин әһеле хәжәт ине түрәлеген һиммәтләр өсөн. Саҡырып ҡайтарыуы ла шунан. Уртаҡ тел табып, арыу ғына эшләп тә киткәйнеләр. Яныш, үҙ һүҙле, ныҡыш түрә, тора-

бара үҙенекен ныгырак кайырҙы, төрлө баш-баштаклыктарын, хилаф эштәрен йомоп, муллаһынан аклатырға тырышты. Быныһы, хаҡһыҙлыктарын яклашмағас, аралары боҙолдо. Хәйер, тыштан былай дуҫ кеүек күренһәләр ҙә, эстән бер-береһенән биҙешеп баралар ине улар.

Бының сәбәптәре төптәнерәк килә ине булһа кәрәк. Яныштар, үҙҙәре мактанғанса, боронғо мырҙалар нәҫеле, аҫыл һөйәк зат. Казан ханлығы замандарында ук мырҙалык алған ата-бабалары, Рәсәйҙең көсәйеп барғанын тойоп, хандарына хыянат итеп, батшаға һатылып, дворянлык дәрәжәһе, Касим яғынан ер биләмәләре эләктергән. Касим ханлығының исем өсөн дә хәжәте калмағас, был мырҙалар Муром, Төмән тарафтарында сик буйын һаклар йомошло мишәрҙәргә әйләнгән. Күбеһе крәҫтиәнгә, “сабаталы” дворянға. Бының да кәрәге бөткәс, яусыл башкорттарҙы баҫтырыр өсөн Урал тарафына күсерелгән. Яныштың атаһы Абдулла старшина башкорт яуҙарын туҙҙырышыуҙа айырыуса канһыҙлык күрһәткән. Ауылдар яндырып, әҙәмдәрҙе кырып, яңы ерҙәргә эйә булған. Шуға урындағы халык Абдулла, Яныш мырҙа нәҫелдәре ише килмешәктәрҙе яманға сыккан төмәндәр тип ләкәпләй.

Яныш старшина ла ата-бабаларына эйәрә һатлык йәнлеген, төмәнлеген кыуҙы. Үҙ кул аҫтындағыларҙы – мишәрме, татармы, башкортмо булһын – берҙәй йәнен кыйҙы, өйәҙ, губерна түрәләре алдында тоғролоғон танытты. Шулай дәрәжә, миҙал, ышаныс  яуланы.

Әҙәм карғышы төшмәһә, Хоҙайҙыкы ла төшмәй бит, исмаһам. Хәҙер үҙ командаһындағы ун биш ауылдың халкын төрлө алымы, юк кына сәбәп табып һуктырыуы, баш-баштаклыктары менән йөҙәтә, кандарын эсә яуыз. Өҫтәүенә, Яныштың старшиналығы батша закондарының катылығы һаман арта барған осорға тура килде. Ул йылдарҙа указ артынан указ килә тора, үҙ түрәң указ, фарман һайын оторо котора. Ундағы бер нәмәне ике итә, һалымды алымы менән бишкә еткерә. Түрә нәфсеһе кырк батман, харам йыйып байый.

Командаһындағы ун биш ауылға үҙе баш, үҙе түш. Үҙ карамағында старосталары, яһауыл-сотниктары, куштандары бар. Эргәһендә писары. Кәрәк икән, һыбайлылары әҙер. Рәсми рәүештә старшина тигән исеме булғас, хәрби командалағыса, мәғлүм, өҫтәмә хокуктарға эйә. Тынысырак сакта команда старшинаһы икән, яу, бола купһа, походный старшина. Холокһоҙлоғо хәттин ашкан: берәүгә әҙ генә асыуы килдеме, тота  ла һуктыра, зинданға яптырып куя. Баш бирмәгәнен һылтау табып ситкә олактыра. Хөкөмө үҙ кулында. Үҙе Өфөләге оло түрәләренә генә буйһона. Түрәне түрә һаклай.

Йылына ун тапкыр әйләнеп сыға ауылдарын. Биш-алты көнгә бар командаһы менән ҙурҙан кубып илгә сығырын – тәүгеһен көҙгә иген эштәре бөтөп, мал кураға ингән, һуғым һуйылған мул, иркен миҙгелгә тура килтерә. Бараһы ауылдарына аҙна-ун көн элгәре хәбәр итеп куя. Тегеләр – старостаһы, ғәйреһе – әҙерләнергә керешә. Беләләр түрәләренең ни көҫәгәнен. Түрәнең теләгәне дүрт ”каф”, ти: каҙы,кыҙ, кымыҙ, куҙы – ошо якта сыкманы микән шундай әйтем һүҙ?

Иң йотатҡаны – алым алмағы. Староста самалай инде старшинаһының этлеген: алым менән ҡалдырғанын, уғрыларҙы – тоғро, тоғроларҙы уғры иткәнен. Хөкөмө үҙ ҡулында, алымы кеҫәһендә. Ауыл башлығына шуныһы мөһим: ауылдаштарына самаһыҙ зыяны теймәһен, бүре лә туҡ, һарыҡ та иҫән ҡалһын. Яуыз Яныштың быңдай алымсалыҡтары хаҡында Батырша аҙаҡ батша ғали йәнәптәренә яҙған хатында шулай тир: “Вә дәхи улдыр кем, ҡасан бер уғры тотолһа, ул уғрынан мал алып, уның өҫтөнә хөкөм йөрөтмәйенсә, дәғүәсене солохлоҡка көсләйҙер. Әгәр тыңламаһа, юҡ ерҙән бер төрлө ғәйепле иткән булып, ул дәғүәсене һуҡтыралар. Вә һәм тотолған уғрының тотолмаған юлдаштары бар булһа, йәшеренлек менән уларҙан мал алып, уларҙы эшкәртмәй вә өҫтәренә хөкөм йөрөтмәй ҡалдыралар”.

Үреш, Орош, Мерәҫем, тағы бер-ике ваҡ ауылдарҙы командаһы менән ҡыҙырып сыҡҡанда, яҡшыһына ла, яманына ла дүнә, ғәҙәтенсә һыйҙары ташып, ҡуштандары йүгереп тора. Баш бирмәй булашҡандарына был юлы ла ҡаты ҡуллылығын таныта, бәғзеһен йомшаҡ йәйеп ҡатыға ултырта. Нығыраҡ белһендәр түрәләренең кем икәнен, уға ҡарышмаҡтың, һүҙ оҙайтмаҡтың ни менән бөтөрөн.

Шул тиклем үҙәгенә үткәндер инде, күпме кешенең баштарын ашап, яҙмыштарын боҙоп, мәсхәрәләп, тапап үткән Яныштың яман ҡылыҡтарын, яуызлыҡтарын Батырша батшаға яҙған хатында ла бер-нисәһен атап китергә мәжбүр булыр. Мәҫәлән, аҙғынлығын да. “Вә дәхи улдыр кем, үҙ командаһында вә һәм ғәйр елә ҡайһылыр кем үҙе йөрөй торған ауылдарҙа билгеләнгән, күҙгә күренгеләй бер ямаллы[12] ҡатынды зина менән алып ятыр өсөн көсләр, ҡурҡытыр, – тип яҙыр ул. – Бәс, һәр ҡасан командаһы араһында йөрөргә сығыр булһа, командаһындағы кешеләр иҫерткестәр, балдар әҙерләп вә һәм зинаға билдәләнгән ҡатынды әҙерләп, уның ул ғәҙәт ителгән боҙоҡ ҡағиҙәһен иреклe-ирекһеҙ камиллайҙар. Әгәр ул зинаға билдәләнгән ҡатындарҙың ирҙәренән йәки ҡәрҙәштәренән йәки ғәйреләрҙән ризаһыҙлыҡ вә инҡарлыҡ хәле беленһә, уларҙы тиҙ-ара бер хәйлә менән һуҡтыралар. Шундай хәйлә менән кем, үҙе менән бергә эске мәжлесендә йырлашып вә зина ваҡытында ҡарауыл тороп йөрөй торған егеттәрҙән береһе баш оралыр, фәлән кеше мине һүкте йәки һуҡты, тип. Ул егеттәрҙән икенсеһе геүаһлыҡ[13] бирәлер, һүкте йәки һуҡты тип. Унан һуң тегеләрҙе һуҡтыралар. Быңдай золомлоҡ хәлдәрҙе күреп, һис кемдең дәм ормаҡ[14] тәҡәте ҡалмайҙыр. Бәлкем, уның теләгәнсә булалардыр иреклe-ирекһеҙ”.

Шулай инде, түрәгә тарыма, тарыһаң арыма. Золомлоҡтоң аръяғына сыҡмыш. Донъяла Алла шайтанынан әҙәм шайтаны яман.

Дин эштәренә лә тығыла башланы был әҙәм шайтаны. Мираҫ малы, никах, талаҡ эштәренә лә ҡыҫылып, Яныштың бойороғо менән килешмәгән әҙәмдәрҙе тота ла һуҡтыра. Әгәр инде дәғүәселәр ҡаты тороп, старшина китап хөкөмөнә ебәрергә мәжбүр булһа, ахунға йә муллаға алдан яҙып күндерә йә һөйләшеп ҡуя. Ә шаһиттарға бойоралар, мин әйткәнсә геүаһлыҡ итегеҙ, тип. Старшинаға яҡын ахундар йәки уға

буйһонған муллалар ирекһеҙҙән, гонаһҡа кереп, бының әмерен үтәргә мәжбүрҙәр.

Батыршаның ҡарамағына ла бер нисә тапҡыр дәғүәселәрен ебәрҙе, яҙыу менән үҙе теләгәнсә хөкөм итергә бойороп. Ләкин ул старшина бойороғонса түгел, бәлки шәриғәт ҡушҡанса, ғәҙеллек менән хәл итте бәхәсле мәсьәләләрҙе. Шуға халыҡ Яныштың хаҡһыҙлығы, ҡыйырһытыуы менән килешмәйенсә, йыш ҡына муллаға килә башланы, яҡлау тапты, кәңәш һораны, уға һыйынды. Шунан ары яҡынлыҡтары бөттө. Хәйер, тыштан — заһирда дуҫ кеүек, эстән — батинда дошман инеләр инде улар.

Быларҙы бер-береһенә бәйләр гизле ваҡиға булып алды. Көндәрҙән бер көн Батыршаға сыбыҡ осо мулла Исмәғил Рәжәп улы килде. 1755 йылдың ҡышы, хәмәлдең әүәл көндәреме йәки ҫәүерҙең башымы ине. Өйлә намаҙына икәүләп мәсеткә барҙылар, аҙаҡ мәсет ҡырында, хилүәт урында оҙаҡ һөйләшеп ултырҙылар. Шунда ул серле бер хәбәр ишетте.

— Әй, мулла Батырша туған, яңыраҡ йөрөп килгән сәфәремдә Сирмешән буйында, ҡайнаш йортонда бер ғәжәп серанә хәл аңланым, һиңә бәян итәйем әле, – тине ул серләндереп.

— Хуптыр, бәян әйләгеҙ, – тине Батырша.

— Сирмешәндәге бер ҡайнағам миңә әйтте: “Әй, кейәүем мулла Исмәғил, һине ғәйәт тә түҙемһеҙләнеп көтә инем. Хәбәр ебәрергә әҙерләнеп бөткәйнем бер гизле серанә хәл өсөн, үҙең ваҡытлы килеп сыҡтың, иншалла. Шундай хәл, кем, – ти ҡайнағам, – Болғар ҡәлғәһендә минең ғәйәт серҙәш бер урыҫ дуҫтым бар, фәлән исемле. Ул дуҫтым ифрат күп саф көмөш аҡса хазинаһы тапмыш. Тәңкәһе ислам яҙыулы икән. Шул көйө ғәмәлгә ярамай. Эретеп, һум көмөшкә әйләндермәк кәрәк. Шул аҡсаны миңә, минең аша сер һыйҙырырҙай иң ышаныслы кешеләргә бирә. Шарты, йәғни мәҫәлән, ун бот бирһә, эретеп, биш бот уға ҡайтармаҡ. Биш бот яныңа ҡала”. Йәғни, унға биш, икегә бер нисбәте, ти. Шул урыҫ дуҫты әйтә, ти, тағы ла ышаныслы кешеләрең булһа, миңә ебәргел, тип. Хатта маҡтана икән, хазина үҙенә генә түгел, балаларымдың балаларына етер, тип. Имде, әй кейәүем мулла Исмәғил, мин һине йән дуҫтымдай ышаныслы кейәүем күреп, был серҙе һиңә әғләм әйләйем, әгәр мәйелең булһа, хәҙер үк бар, бер нисә тәңкә ал, өйөңә ҡайтып кәңәшеп вә йәнә яраҡлы вә ышаныслы тағы бер кеше алып килгел, ти ҡайнағам. Мәйтәм: эй, ҡайнаға, ғаиләм менән кәңәшләшәйем, ысындан да, бәлкем, бер-ике юлдаш та алырмын. Шулай тигәс, ҡайнағам бер нисә көмөш аҡса күрһәтте. Күп ятып ҡараһыу төҫкә кергән иҫке бер алтынлыҡ көмөш тәңкәләр. Ислам яҙыулы боронғо болғар аҡсалары. Һәр хәлдә, хаҡын сығарып булыр хазина.

Исмәғил тынып ҡалғас, Батырша һорай ҡуйҙы:

— Был сереңде ғәйреләргә һөйләмәнеңме һуң?

— Старшина Янышҡа вә старшина Сөләймәнгә һүҙләнем. Яныш аға ғәйәт тә шатланды вә әйтте: “Бының хәйләһен вә йүнен табырбыҙ.

Ни ҡәҙәр күп һум булһа ла, эретеп, һум көмөш итербеҙ. Унан һуң фәһем итеп, теләгәнебеҙсә тәсарыф ҡылырбыҙ[15]", – тине. Сөләймән старшина ла был һүҙҙе хуп күрҙе вә әйтте: "Көндәшле ауылының Ғәбделманаф илә Диҡайҙан был серҙе аңлаған ием. Алар был эшкә ҡатланалар", – тине. Унан һуң Ғәбделманафты күрҙем, һөйләштем. Ул Ғәбделманафтарҙың да белеш урыҫы икән. Уларға урыҫ ботлап бирмәйҙер, өсәр-дүртәр йөҙ һумлап бирә, имеш. Алыусы кешегә аҙ файҙа илә, тип һүҙләне Ғәбделманаф.

Ҡайнағаһының был сер сискәненә үҙенең ҡатнашырын-ҡатнашмаҫын әлегә өҙә генә әйтмәһә лә, Батырша эсенән генә ҡыуанып, күңеленә һалып ҡуйҙы: Яныш старшинаның ҡылын тартып ҡарау өсөн был сер, бәлкем, ярайһы бер сәбәп булыр. Сер вәсиләһе[16] илә башҡа серҙәргә лә үтәрбеҙ, бәлкем. Янышты нисек тә тышаулайһы ине, ҡороғорон.

## Батшаның бер указы

Батшаның 1754 йылдың 16 март указы күптәрҙе аптырашта ҡалдырҙы. Бынағайыш, бығаса тауҙарҙан һәм күлдәрҙән үҙең бушҡа тумырып алып ҡайтҡан Хоҙай байлығын – тоҙҙо инде ҡаҙнанан түләп ал, имеш. Тапҡандар тыйыр нәмә. Бото бер тин булһа ине, ә ул 35 тин көмөш. Йәнәһе, ергә 25 тинлек яһаҡты бөтөрөп, тоҙ һатып алыу ғына индергәндәр. Алмашына тилмеш – йөгөнгәнгә яңы йөк. Донъя көткәнгә, ишле мал аҫырағанға ваҡ тоҙо ла, таш тоҙо ла кәрәк. Ботлап-ботлап. Йылына күпме хаҡҡа төшә инде ул хәҙер һәр тинен табыуы ауыр заманда? Ҡаҙна Хоҙай хазинаһынан бушлай кеҫә ҡалынайтһын, ә мазлумдар һуңғы тиндәренән яҙһынсы.

Был указдың ялпы әле ҡапылда абайлап бөтмәгән йәнә мәкерлерәк яғы бар икән. Яһаҡтан бушатыу ергә хоҡуҡтан яҙыу тигән дә һүҙ – аҫабалар быны тиҙ төшөндөләр. Төшөнгәс, шау-ғауға китте.

Бәғзеләре – һатып алырға аҡсалары юҡтары, үтә ҡыҫынҡы ғүмер иткәндәре – ғәҙәттәгесә бушлай тумыра торған тоҙҙарын шул тау-күлдәрҙән урлап алмаҡ булдылар. Күптәрен тотоп ябып ҡуйҙылар, штрафын һалдылар. Ҡайһы бер старшиналар, иләү халҡын яҡлап, батша указы менән килешмәйенсә, өйәҙ һәм губерна түрәләренә хаттар яҙып, тамғалар йыйып тапшырҙылар, иләү исеменән "тоҙ указын" юҡҡа сығарыуҙы һоранылар. Ҡуштан старшиналар иһә указды яҡлап, тоҙҙо һатып алырға әҙерлеген оло түрәләренә белдереп яҡшатландылар.

Ни ғәжәп, Башҡортостан буйлап ике указ йөрөнө. Бәғзе бер түрәһе рәхимле батша исеменән килеп бер ҡағыҙ уҡыны: "Теләгән хәтлем тоҙҙо тауҙар йәки күлдәрҙән алығыҙ", – тип, ә икенсе килгәне, губернанан генерал указы тип, бүтән төрлө уҡып ишеттерҙе: "Тоҙҙо фәкәт ҡәлғәнән алығыҙ", – тип. Былары талаш-тартышты тағы ҡыҙҙырҙы. Губернатор указы менән риза булмаған старшиналарҙы өйәҙ йәки губерна үҙәгенә саҡыртып ҡыҫа башланылар, ҡайһыларын туҡмап төрмәгә

лә ябып ҡуйҙылар. Бәғзеләрен бер саҡыртып алып, бер ҡайтарып, яңынан саҡыртып, тағы ҡайтарып, әллә күпме ыҙалап йөрөттөләр. Байтағын шулай яфалап, йонсотоп ризалаштырҙылар. Әммә иләү халҡы – башҡорттары ла, мишәрҙәре лә, сыуашы ла, татары, ғәйреләре, һәммәһе – ҡырмыҫҡа иләүендәй, һаман мыжғыуын белде.

1754 йылдың көҙөндә Ырымбурҙан Өфөгә генерал-майор Алексей Тевкелев килеп төштө. Суҡынмыш Тәфтиләү түрә элекке кеүек ҡанығып-ҡанһыҙланып, яман тотонманы был юлы, нисектер башта һәйбәт һөйләшкән булды. Старшиналарҙы муллалары менән бергә саҡыртты, ҡаҙна йортона урынлаштырҙы. Ҡазан, Уса, Себер юлынан, Байлар, Бүләр, Йәнәй, Йылан, Уран, Гәрәй, Гәйнә, Иректе, Танып, Көҙәй, Балыҡсы, Әй иләүҙәренән, бүтәндәренән әллә күпме ил-йорт хужалары йыйылғайны. Тәфтиләү түрә йыйнаулап та, иләүләп тә һөйләште. Күнгәндәрен тиҙ ҡайтарып ебәрҙе, күнмәгәндәрен тота, ҡыҫа бирҙе, янауҙан да тартынманы.

Яныш старшина менән Батырша муллаға ла нәүбәт етте. Һөйләшкән урыны Имәнҡаланың Һутылҡы ярындағы бер ҡатлы дәү таш бинала ине. Оло бүлмәлә оҙонса имән өҫтәл артына креслоға йыуантыҡ Тәфтиләү түрә йәйелеп ултырып алған. Уҡалы эполеттары, аксельбанттары ялтырап тора. Башҡорт йорт-илдәрен яндырып, халҡын ҡырып, йыр әйткәнсә, яурындарын алтынлаған һатлыҡ суҡынмыш инде. Үҙен, нисектер, үҙ түрәләре итеберәк күрһәтергә тырышты. Мырҙа ата-бабалары телендә һөйләште, эргәһендә рус түрәләре лә, тылмастары ла юҡ ине.

— Шулай килешәйек, ә һин, старшина, быға үҙең яуаплы: хәҙер ҡул тамғаһы ҡуйып, ҡағыҙ ҡалдыраһығыҙ. Сана юлы төшкәс, алынаһы тоҙоғоҙ Елдәк ҡәлғәһенән алынып, түләнәһе хаҡы түләнеп бөтөргә тейеш, – әмер рәүешле һүҙен шулай осланы генерал. Бер аҙ торғас, иҫкәртмәле нөктәһен ҡуйҙы. – Белегеҙ, алдығыҙҙа мин мырҙағыҙ тормайынса, ниндәйҙер бер рус түрәһе, генералы торһа, ул һеҙҙең менән йүнләп һөйләшеп тә булашмаҫ ине. Старшина, һинең миҙалыңды өҙөп алып, ә һинең мулла шәһәҙәтнамәңде юҡҡа сығартып, үҙегеҙҙе әллә ҡайҙа һөрҙөрөр ине. Рәхмәт уҡығыҙ үҙ генералығыҙға.

— Рәхмәт, мырҙа хәҙрәт, – тип һикереп торҙо Яныш.

Ҡағыҙға ҡул ҡуйыуҙан башҡа сара ҡалманы.

Тәфтиләү икенсе көнөнә саҡыртҡан иләү кешеләрен тағы бергә йыйҙы. Аҙаҡҡы әйткән һүҙҙәре бойороҡ рәүешле ҡаты һәм киҫәтеүле ине:

— Падишаһыбыҙ ғали йәнәптәренең указын үтәүгә һәр берегеҙ мәсьүлиәтле. Ғәуамды күндермәк, ризалатмаҡ һеҙҙең эш. Фетнә һүҙгә ҡолаҡ һалып, ғәйреләрегеҙ һаҡалын йолҡторҙо, ары китһә, миҙал ғынамы, баштарығыҙҙы һалыуығыҙ бар. Сана төшөп, юлдар асылғас, һәммәгеҙҙән дә рапорт килеп етергә тейеш. Шуның менән тамам ҡылдыҡ.

Ошо тоҙ ғауғалары ваҡытында ҡәлғәнең тоҙ һатыусы түрәләре, офицерҙары шашынып алды. Ул халыҡты алдаһындармы, ул алым төрткәнде көтһөндәрме, йомош-үтенесте юрый һуҙһындармы. Ҡәлғә

чиновниктарына эреле-ваҡлы йомоштар ҙа төшөп тора, ялыу-фәлән менән барырға ла тура килә. Ям, ылау хеҙмәте булдымы, кемгә барһын? Әлбиттә, ямсы башлыҡҡа. Рекрут мәсьәләһен кем менән башлап хәл итһен? Ҡәлғә башлығы менән. Ҡәлғә-атау малы ерен тапаһынмы, фәләне бесәнен сабып йә кәбәнен тейәп китһенме, кемгә мөрәжәғәт итһен? Гарнизон судьяһына. Ә ҡәлғә хужалары үҙенекеләрен яҡларға, аҡларға тырышып ятҡан көндәре. Эш ҡуйырып китһә, юрый һуҙалар, йөрөтөп төңөлтәләр. Ваҡ ҡына йомошоңдо йомош иткәнсе лә ике хаҡын сығарталар. Олораҡтарына китһә – бер тинлек ҡуянға биш тинлек зыян.

Ҡарға күҙен ҡарға суҡыймы ла, мазлум хаҡы уларға  хаҡмы – халыҡтың  ҡәлғә түрәләренә барырға тамам өмөтө өҙөлдө. Аптырағас, юғарыраҡтарына йөрөп ҡаранылар.

Өфөлә Луткин тигән кенәз йәшәй ине. Шул кенәз оло түрәләрҙең ғәҙелһеҙлектәрен күрә алмай, имеш, һәр мазлум дәғүәсегә ярҙам итергә әҙер икән, тип һөйләйҙәр ине. Бәлки, хаҡтыр, уға өмөтләнеп шикәйәт менән йөрөүселәр күп булған. Офицер, генерал. Хатта өйәҙ башлыҡтарын да бөккән, дәғүәсе файҙаһына хәл итешкеләгән, тиҙәр. Үҙе лә әжәрен сумдырып алған, ахырыһы. Шуға баш-баштағыраҡ өйәҙ түрәһенә бәйле эшкә килеп терәлһә, булдырһа, шул кенәз генә булдырыр, тип быға барырҙар ине.

Бер заман Яныш старшинаның үҙ командаһындағы яман эштәре баштан ашҡас, әлеге Үреш, Өрөш, Мәрәсем ауылы кешеләренең тамам зиттарына тейгәне, әллә күпме аҡса-малдарынан яҙғандары бергәләшеп, ошо Өфө кенәзенең үҙенә мөрәжәғәт иткәндәр. Старшинаның бөтә баш-баштаҡлығын, Сүнсәләй мишәрҙән көтөргә тип алған 40 һум аҡса, 3 ат ҡайтарасағын кенәз кәңәше буйынса килештереп яҙҙырғандар, өйәҙ писарынан  күсерткәндәр былар шикәйәттәрен. Мирҙан йыйып йомған аҡсаларҙы ла телгә алғандар. Кенәзде адвокат итеп яллағандар. Килешкән мул ғына аҡсаһын түләгәс, өҫтәп бер мискә балын биргәс, эш арыу ғына киткән. Яныште, үҙҙәрен бер-ике тапҡыр Өфөгә саҡыртып күҙләштергәндәр, старшинаны хатта шунда уҡ ябып ҡуйыу менән янағандар. Әммә аҙаҡ Яныш үҙе әллә күпме Өфө юлын  тапай башлағас (тегеләр тикшереү ҡыҙа тип уйлаһалар), эш яйлап һүрелә барған. Старшина үҙе мулыраҡ аҡса-алым төрткән, күрәһең. Өйәҙҙә күҙ күргән түрәләре лә күп. Былар нишләһен, йәнә кәңәш буйынса судьяһына, тағы кемдәренәлер кеҫә төптәрен ҡырғандар, әллә күпме балын, ит-майын ташығандар. Бер-ике айҙа бөтөр тигән эш йылдарға һуҙылған. Һөҙөмтә шул булған: хисапһыҙ аҡса-мал сарыф ҡылынған. Яныш старшина әҙ-мәҙ баҫыла төшкәндәй иткән. Шулай хәҡиҡәтте табайым, аҡса-малдарымды ҡайтарайым тигәндәр, әллә күпме аҡса-мал түгеп, үҙҙәре тишек суманға ултырып ҡалғандар.

Ҡарышҡа яҡын иләүҙәрҙән, Өфө өйәҙенең төрлө мөйөшөнән шомло хәбәрҙәр, боҙоҡ эштәр йышыраҡ ишетелә башланы. Биләр иләүендә указдан тыш ылау бирмәгән өсөн ике кешене  һынһыҙ итеп туҡмап ташлағандар, ти. Берәһе үлгән, икенсеһе мал булырмы-юҡмы, тиҙәр.

Златоуст ҡәлғәһе кешеләренән мир еренә кергән малын ҡыуып сығарғанда һыйырҙары зыянланған өсөн бер татарҙы Силәбегә алып китеп, ҡылыс менән ике ҡулын да беләҙек тәңгәленән өҙә сабып ҡайтарғандар, имеш. Өфө менән Ырымбур араһында драгундарҙың юлдағыларҙы баҫып, һатырға илтер малдарын, хатта аттарын һалдырып алыуҙар ҙа йышайған икән. Ҡайһы бер төбәктәрҙә ил-йорт талап йөрөүсе бурҙар күбәйгән, ти.

Сик хеҙмәтендә йөрөгәндә аты зыянлап, атһыҙ-ниһеҙ ҡайтҡан кешеләр күп иләүҙән, хатта һәр бер ауылдан тиерлек. Үҙҙәре лә имгәнеп, йә ауырып ҡайтҡандарының иҫәбенә сығырлыҡ түгел. Ҡайҙа ла ришүәт алыуҙарҙы, түрәләр үҙ белдектәренә һалған һалымдар, губерна, өйәҙ йомошлоларын, төрлө чиновниктарын ил өҫтөндә ашатып-эсереүҙәрҙе, оҙатып йөрөүҙәрҙе, уларҙың баш-баштаҡлыҡтарын, мыҫҡыллйәберҙәрен һанап бөткөһөҙ. Быndай хәлдәргә сик булмаҫмы икән ни? Золомлоҡ старшиналарҙа, өйәҙ түрәләрендә генәме? Губернаныҡылар ни ҡарай, әллә белмәйме? Әллә бар яманлыҡ юғарынан киләме? Бадишаһтың үҙен ғәҙел, имеш, тиҙәр ине, шәй... Бына шундай һорауҙар Батыршаның уйын һуңғы йылдарҙа нығыраҡ биләй башланы. Ул төрлөсә баш ватты, ләкин уйҙарының осона һис сыға алманы.

Золомлоҡ башы губерна башлығындалыр, бәлкем? Шул мәлғүн, фәһемһеҙ залим Неплюев, бадишаһына һөйөклө булайым вә бөйөк мәртәбә табайым тип, ҡул аҫтындағы халыҡтарҙы болғатып, төрлө хәлдәргә дүндереп, өҫтәүенә, ҡәҙимдә булмаған йөкләмәләрҙе өҫтө-өҫтөнә өйөп, ыҙа-яфалар, тарлыҡ-ноҡсанлыҡтар килтерәләр. Ҡул аҫтымдағы халайыҡтарым тыңлаусан, күндәм тип, батшаһы алдында яҡшатланыр. Бадишаһ үҙе, бәлкем, ғәҙелдер, тик ана шул яуыз генералдарының ғәҙелһеҙлектәрен, золомдарын ғына белмәйҙер. Белһә, белдерһәләр икәнсе. Шундайҙар табылһа һуң?

Өс-дүрт урындан тәрикә малын бүлергә саҡырҙылар. Быndай һиммәтле юл-йомош Мөслим тарафтарынан да, Уран, Гәйнә иләүҙәренән дә бар. Илгә итәғәт фарыз: ололап үтенгән эшкә Батырша һәр саҡ әҙер: шәриғәт ҡушҡанын ғәҙел үтәр, халыҡ күреп, тын алышын тыңлап ҡайтыр, ҡунаҡ-миһман булыр.

Урал аръяғына, ҡайнылары йортона инде ике йәй бара алғандары юҡ. Юлы ла яҡын ара түгел. Балалары ваҡ. Шулай ҙа быйыл, яйы сығып торғанда, тәүәккәлләргә булдылар.

Алыҫ юлға бөтә ғаиләһе менән йәй башынан уҡ ҡуҙғалдылар. Сиғандар шикелле, ваҡ бала-сағалары менән бер арбаға тейәнеп, пар ат егеп сыҡтылар. Урманлы-таулы юл өс аҙнаға яҡын һуҙылды. Биш йәшлек улы Тажетдины, йәше лә тулып етмәгән Зөләйхаһы ныҡ ҡына йонсоһалар ҙа, бирешмәнеләр, шикелле. Зөлбохары ла бер тилбер ҡатын икән, һыҡраныу-фәлән һиҙҙермәне. Һағындырған түркен йортона бара шул. Энеһе Мостафа ла ыһ та итмәне, атын-ниен, ваҡ туғандарын ҡарашты. Юлдарында, ҡай төбәктәргә етмәһен, Батыршаның таныш-белештәре, үҙен былай ишетеп белгәндәр булмай ҡалмай ине. Йә улдары

унда уҡыған, йә уҡый, йә үҙе элек төшөп йөрөгән ере, йә былай беләләр. Имам-хатип мөхтәрәм мөҙәрис хәҙрәткә ҡайҙа ла ишектәр асыҡ булды. Ҡариҙелде, Әй һыуҙарын кискәндә булһынмы, Урал артылыштарын артылғандамы, һәр ерҙә башҡорттар ҡунаҡ итеп, ял алдырып, ауыр юлдарҙа оҙатышып, ярҙамлашып ҡалдылар. Исәт провинцияһына, һалйығуттар яғына килеп сыҡҡас, үҙ ат-арбалары менән Мөслимгәсә еткереп ҡуйҙылар. Береһе Олоғыуышҡа уҡ илтеште.

Батырша Зөлбохары, балалары менән өй беренсә тип әйтерлек аҙна буйы ҡунаҡ булып йөрөнө. Юл ғазаптары онотолдо, күңелдәре күрәйҙе. Бигерәк тә нык талсыҡҡан Зөлбохарҙың йөҙөнә нур йүгерҙе, үҙе, гүйә, фәрештәләй осоп ҡына йөрөй ине тыуған ерҙәрендә. Һөйләп һүҙе бөтмәне. Тажетдинен, сабый Зөләйхаһын һөйөп туйманылар. Ғүмеренең ошо аҙнаһынан да ҡәҙерле, наҙлы, үтә ҡыуаныслы саҡтары тағы булыр микән хәләл ефетенең? Татыу ғаиләһе йәненә ял икән, туғандары танһыҡтың танһығы төҫлө ине уға.

Зөлбохарының, ҡайны-ҡәйнәһенең, ҡайынбикә-ҡайнағаларының, ғәйреләренең күңелен күреп, етерлек ҡунаҡ булып, арығандары бөтөп өлгөрҙөмө-юҡмы, Батыршаның уйы-рухы ил-йорт, иләү иркендә ине. Күп ирәүәнләндермәнеләр, Мөслимгә алып киттеләр.

Бер-ике көн ҙур мәжлестәрҙә булғандан һуң Мөслим старшина Батыршаны төп йорттан айырылып сыҡҡан унлап өйлө генә бер ауылға саҡырҙы. Шунда бер аулаҡ саҡ тура килтереп, икәүҙән-икәү һөйләштеләр, ниһайәт.

— Эй, Мөслим аға, нисегерәк һуң, замана көндән-көн хәйерлегәме, әллә хәйерһеҙгәме? – тип тура ҡуйҙы һорауҙы Батырша.

— Әй, вәлиниғмәт, ни өсөн һорайһың, хәҙрәтебеҙгә лә мәғлүмдер ис, кафырҙың яфаһынан елкәбеҙ бөткәне, – шулай ҡырҡа яуапланы старшина. – Хаҡ тәғәлә үҙҙәренең елкәләрен һындырһасы, өмөттәрен өҙһәсе, исмаһам.

— Ә ниңә ул саҡлы, Мөслим аға?..

— Белһәң икән, вәлиниғмәт, һин киткәс күргән ыҙаларҙы. Минең команданан байтаҡ кешеләрҙе алдап-йолдап, хәйләләп динебеҙҙән сығарҙылар, һалйығут иләүенән күп йәмәғәтте ирле-ҡатынлы һәм балалары илә суҡындырҙылар.

— Минең заманда ундай хәлдәр булмағайны ла баһа.

— Далмат монастырынан Дмитрий тигән бер архимандрит яман шашынды: ул алдап, ул йолдап суҡындыртты шул кафыр.

— Ахун, муллалар, мосолмандар үҙҙәре ҡарыуыраҡ булһалар һуң?

— Ахундың йүне булмаһа, насар муллалар үҙҙәре дин боҙор, ти.

— Мөслим аға, үҙегеҙҙең ҡеүәт-абруй һуң?

— Ҡеүәт-абруй тиһең! Әйтһәм, әйтәйем үҙеңә: йәшәйем йәшәүен ҡарышып, ҡеүәтем төкәнде килеп. Үкенеп бөтә алмайым хәҙер: падишаһыма тоғролоҡ, оло түрәләр фарманы тип, диндәштәремдең ҡанын түктем, йәнем ҡыйҙым. Ни файҙа таптыҡ? Тоғро хеҙмәт иткән һайын һалымы, яфалары артыуын ҡыла. Әүәл халҡыбыҙҙың сәләмәтлегенә вә

йортобоҙҙоң һиммәте итеп, указдар уҡылыр ине: “Мишәр халҡы вә вернай башҡорт халҡы ярлыҡаулы барсалары торһондар йорттарында ҡәҙими ҡағиҙәләрендә”, — тип. Шулай халыҡ тынысланыр, болалар бөтөр ине.

— Мөслим ağа, башҡорт яуҙарын үҙегеҙ ҙә баҫтырышып йөрөгәнһегеҙ түгелме әүәлерәк?

— Падишаһыбыҙ указын үтәп – булды. Үтәнек, вәғәҙә иткән ерҙәр алдыҡ. Аҙаҡ бер епкә бәйләнеләр барын. Һыҙғы башҡорттары алдында башымды һалғым килеп китә хатта хәҙер. Һалйығут башҡорттарым менән бергә яуға күтәрелер инем, ҡулымдан килһә.

– Ярлыҡаһын Хоҙай, Мөслим ағa. Һинең әле ҡеүәтең дә дүнергә, аҡылың да кәмергә иртәрәктер. Мин үҙем дә, Мөслим ағa, диндәштәремдең аяныс хәлен, яфаларын күреп, динебеҙ, Хоҙайыбыҙ хаҡына оло сәфәргә сыҡҡанмын...

Шул көндәрҙә һалйығут иләүенең башҡорттары, мишәрҙәре үҙҙәренә һабан туйына саҡырҙылар. Мөслимдәр алтмыш-етмеш атлы кеше булып барҙылар. Һабантуйға теләгән кеше бара ала, уны тыймаҡ юҡ. Әммә ҡоҙа-ҡоҙағыйҙары, кейәү-ҡыҙҙары саҡырғанға, байрамға атап саҡырылғандарға айырым хөрмәт. Араларында Мөслим старшина менән Баһадиршаһ мулла иң арҙаҡлы ҡунаҡтары ине.

Һалйығуттар һабантуйҙарын Бәгәрәк йылғаһы буйында, тәбиғәттең иң матур урынында ҡорғандар. Был яҡтар көрәшергә, ат сабыштырырға, төрлө уйын, ярыштар ҡороуға әүәҫ халыҡ. Ауыл-ауыл батыры, башҡорт-мишәр батырҙары үҙ-ара көрәше тамашаның тамашаһы ине. Еңеүселәргә, хатта еңелеүсерәргә лә бүләкте бәҫле һәм мул әҙерләгәндәр. Араларында ниндәй ғәййәр, батыр ир-егеттәр бар. Алыш-көрәштә үҙҙәрен бер торғаны алпамыша тиерһең – көс-ҡеүәттәре ташып тора. Атта сабышыуҙары, ҡылыс менән оҫта яҫҡышыуҙары һуң. Ундай азаматтар менән әллә низәр эшләргә мөмкин. Халыҡ, ил ағалары яҡшы белә: һабантуй ғәҙәти байрам ғына түгел, ир-егеттәрҙең көс-кәрен, һоллолоғон һынамыш тамашалары ла. Шымсылыҡ ҡылып йөрөгән түрәләр, писар-фәләндәр, ғәйреләре лә күрһен һәм самалаһын быны.

Батырша бигерәк тә батырҙар көрәшен кинәнеп ҡараны. Уҡтан атыш, ат өҫтөндә ҡылыстан сабыш ярыштарын тамаша ҡылды. Бар шул илдең бынамын тигән ғәййәр ир-егеттәре, айбарлылары. Ундайҙар менән әллә низәр ҡылырға булыр ине. Шуны фәһемләне йәнә ил ағаһы.

Халыҡ ыҙа-яфа тип ебеп төшә торғандарҙан түгел. Ана нисек күңел аса ла, ҡайғы-хәсрәттәрен баҫа ла белә ул. Көс, һәләт һынаш ярыштары, уйындары бөткәс, кисләтә һабантуйҙағылар тәбиғәт ҡосағында аш-һыу мәжлестәренә таралышты. Һәр кемдең үҙ ҡоро, үҙ зауығы. Ҡайһылары ауыл-ауыл, туған-тыумаса булып йыйылған. Һәр ҡорҙа һый-хөрмәте, балы, ҡымыҙы артылып тора. Һыйлаш йыр-бейеү, уйын-көлкө менән аралаша.

Шунда ҡорҙаш менән ҡорҙаш, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар гәпләшә. Егеттәр ҡыҙҙар менән таныша, бүләктәр, вәғәҙәләр бирешә. Кемдер ҡыҙын күҙләй, булаһы

киленен, кейәүен тоҫмаллай. Моңһоҙо тамаҡ менән йыуана, оңкото бал-ҡымыҙ тип мәш килә. Ҡыҙып алғаны дәрт-дарманын ҡайҙа ҡуйырға белмәй ыҙалана, нәфселеһе үҙенсә аҙалана. Һабантуйҙың да үҙ батыры менән бахыры ла, һәләтлеһе менән һәләтһеҙе лә, ағаһы менән диуанаһы ла бар икән шул.

Башҡорт, мишәр старшиналары, азаматтар, ғалим-ғөләмә үҙе бер табын ҡорҙо. Уға һабантуй батырҙары өҫтәлде. Ғалим-ғөләмә табынына хас булараҡ, башта дин-ғилем хаҡында вәҡәрәтле етди һүҙ барҙы. Яйлап ул донъя хәлдәренә күсеп китте. Заманаһы борсой ине күптәрҙе.

— Күлдәрҙән ала торған тоҙҙарыбыҙға вә аулай торған һунарҙарыбыҙға тыйыу ҡылынды. Хоҙай биргәнде лә инде һатып ал, имеш. Нисек йәшәмәк кәрәк былай, – тине өлкән генә хужа ағай.

— Ни булмаһын, ошо бадишаһыбыҙ заманында сығып тора йөгөндөргөс указдары, өркөткөс фармандары, – тип өҫтәне икенсеһе.

— Тәҡәт табырлығыбыҙ ҡалманы, өҫтөбөҙгә ниҙер килерен көтөп, шомайып тор инде, – тип зарланды өсөнсөһө.

Халыҡта ҡайҙа ла бер төрлө хәсрәт, донъялар мөшкөллөгө. Аптыраулы һорауҙар ғына түгел, үс-асыу ауаздары ла ине күбеһе. Ғүмер буйы ылау ҡыуып, кордон йөрөп йонсоған мишәр ҙә, һунар итеп, мал бағып көн иткән аҫаба ла, әле һабантуйҙа еңеп сыҡҡан батыр ҙа ил ағалары, муллалар ауыҙынан асығыраҡ яуап, ярһыуын баҫыр фәһемле һүҙ ишеткеһе килә. Кем ни көтмәҫ. Ә уларҙың баштары икеме ни ғаләм алдында уйлағанын ярып һалырға. Ғәм-ғәуам үҙе фәһемләһен, үс алыу ҙа бер мәл күпсеп ташып сығырға тейештер бит. Ҡурын өҫтәр сағы ла етер, бәлкем.

Батырша үҙе лә быға‌са йүнләп асылғаны юҡ. Һөйләүгә ҡарағанда, үҙе күберәк тыңлай. Уға әлегә, күрәһең, халыҡтың тын алышын, уй-фекер ағышын аңлау мөһимерәк. Тирә-йүндә бар уй-ниәттәрен асып һалыр ышаныслы кешеләре лә, уны күтәреп алыр ҡыйыу ир-азаматтар ҙа үтә аҙ шикелле әле.

Мөхтәрәм имам хатиптарына төбәп тә сөалдар булды:

– Мәғлүм, ислам динебеҙҙе ҡыҫмаҡта, рухыбыҙҙы рәнйетмәктә төрлөһө булды, әле лә булып ята. Суҡындырмыштарҙың яман ҡыланыуҙарына һәммәбеҙ шаһит. – Шулай башланы һүҙен Батырша. – 1742 йылғы яман указды илә туҡтатыр булдылар, әммә ләкин динебеҙҙе ҡыҫыу һаман туҡтағаны юҡ. Выждан ихтыярыбыҙ тотолмаҡ миҫле ине лә һуң, ғәмәлдә киреһе шул. Ижтиһат итеп динебеҙҙе һаҡламаҡ, иманыбыҙҙы тотмаҡ үҙебеҙҙән, мөьминдәрем...

Имам хатиптың әйткәндәренә бик үк хушһынып бөтмәнеләр, буғай, мәжлес ҡыҙа бара, һүҙ, бәхәстәр ҙә ҡуйырыбыраҡ китте. Губернаторына, бадишаһына ла тел тейҙереүҙәр ишетелде, янаулы, үсле һүҙҙәр яңғыраны. Йөпләгәне, йөпләмәгәне булды.

Бәғзеһе әйтте: “Үҙ дәүләт халҡы илә уйнаған, үҙ ҡулы аҫтындағыларға золомлоҡ ҡылған йорт уңмаҫ булыр барыбер. Халыҡ теленә төшкән буш булмаҫ, был уҫаллыҡтарҙың ахыр бер ниһәйәһе, сиге барҙыр ие”.

Бәғзеһе әйтте: “Золомлоҡ түрәләребеҙҙә вә янаралдарыбыҙҙалыр, күрәһең. Губернатыр Неплуй янарал, падишаһҡа ярайым тип, үҙенең ахмаҡлығы менән падишаһына, киреһенсә, залимлыҡ ҡылалыр, халайыҡтар өҫтөнә бөткөһөҙ йөкләмәләр йөкмәтеп, яфалар һалып”.

Бәғзеһе әйтте: “Падишаһты залим тимәйбеҙ, падишаһ ғәҙелдер. Вә ләкин үҙ ҡуйынынан китмәгән, беҙгә килеп етмәгән ғәҙеллегенән беҙгә ни файҙа? Күрәһегеҙ, беҙҙең ҡулыбыҙ ҡыҫҡалыр, йорт-кәртәбеҙҙән тышҡа уҙмайҙыр. Йортобоҙ эсендә бер ҡуҙы ҡуйҙың аяғы һынғанын күрһәк, уны бәйләйбеҙ бит. Шуның шикелле, беҙ падишаһыбыҙ ҡулы аҫтындабыҙ. Әгәр хикмәт падишаһлыҡ тикшереүе менән тикшерелһә, күҙе етмәҫме, хәлебеҙгә инмәҫме ине. Вә илла беҙ йортобоҙҙан уҙмаған ҡыҫҡа ҡулыбыҙ менән түрәләр, янаралдар ашаһынан ауыр хәлебеҙҙе ҡасан падишаһ хозурына етештерә алырбыҙ?”

Бәғзеһе әйтте: “Әүәл-әүәлдән ишетә-күрә киләбеҙ, залим түрәләрҙең былдай хаттин ашҡан золомлоҡ хәлдәре, халайыҡтарҙы рәнйетмәктәре падишаһҡа етмәгәнен.

Етештермәккә, бәлкем, шундай әмәл генә барҙыр, әгәр шулар ауыр хәлебеҙ хаҡында белмәһәләр, ишетмәһәләр, үҙҙәренсә золомлоҡ ҡылып ишеттермәгә кәрәктер. Бәс, улар беҙҙең динебеҙҙе хупламаһалар, беҙҙе үҙ диндәренә көсләһәләр, әүәлге падишаһыбыҙ алдында булған эштәребеҙҙе боҙһалар, малдарыбыҙҙы, милектәребеҙҙе тәләф итһәләр, үҙебеҙгә үпкә. Әйҙә, уларса, ант-ғәһетте боҙоп, уларҙың үҙ диндәрен хурлап, үҙ динебеҙгә өндәйек, малдарын, мөлкәттәрен тартып алайыҡ! Күрәһегеҙ: былдай эштәребеҙҙе ҡылһаҡ, падишаһ хозурына тиҙ еткерерҙәр, тәфтиштәр китәр. Әүәл-әүәлдән беҙҙең башҡорттарыбыҙ урыҫтан бер яфа күрмәйенсә, золомлоҡтары артмайынса, ҡуҙғалып бармай торғайны. Башҡорт золом-яфаларға хәҙергесә түҙеп тә йәшәмәне, ҡоралға тотондо, атҡа атланды. Шунан падишаһыбыҙҙан рәхимле указ килер ине: “Башҡорттарым, һеҙгә золомлоҡ ҡылған уҫалдар эт үлемендә үлделәр, һеҙ йортоғоҙҙа аман тороғоҙ”, — тип. Халайыҡтар фетнәләрҙән ҡотолоп, ил-йорт имен-аманға ҡала торғайны...”

Йәйге төн ҡараңғыһы эсендә, ут яҡтыһындағы мәжлестә бал эсеп, теле асылып киткән халыҡ үҙе ана нимәләр һөйләй. Бер ҙә уратыпнитеп тормай, тураға һалдыра. Тимәк, үҙәгенә үткән, тамам зитына тейгән. Был мәжлестә һөйләшеүҙәр Батыршаның зиһененә шул тиклем һеңеп ҡалыр ки, ул аҙаҡ падишаһтың үҙенә атап яҙған атаҡлы хатында шул “бәғзеләр” исеменән ҡайһыларын һүҙмә-һүҙ тиерлек аҡ ҡағыҙға күсерер, улар тәржемәләр аша оло түрәләргә етер, халыҡтың үсауазы булып яңғырар. Әле ул – мәжлес уртаһында. Һәр ҡыйыу фекергә ҡолаҡ һала, фәһемләй, йөпләй, бәғзеһен төҙәтә, ғәйреһен ҡолаҡ тышында ҡалдыра, әммә һис битараф түгел. Баштағы һаҡсыллығы ла онотолдо.

Был мәжлестә бер башҡорт уҙаманы һөйләгән тарих хәтерендә ныҡ ҡалыр. “Беҙҙең хәлебеҙҙән Нуғай юлы халҡының хәле мөшкөлөрәктер, – тине бер аҡһаҡал. – Неплуй янарал менән Ҡотломәт мырҙа Ырым-

бурға яҡын йәшәгән башҡорттарҙың йәнен алып баралар. Ни төшмәһен, башта шуларға төшә. Ул пучта ямы, ул яман ҡала Ырымбурҙы һалышыуы, ул казаклығы, ул бүтәне. Етмәһә, бөгөн йәй буйы бүрәнә ташытып, дранса, ҡабыҡ ҡуптарып, биләгән ерҙәренә, урмандарына көслөк килтереп йонсоталар. Үткәне лә шулар елкәһендә. Ул түбәлә уғын яҙа атмаған, аты ергә ятмаған данлы Алдар батыр бар ине. Заманында бөтөн Башҡортостанды яуға күтәргән шул батыр. Уның аймағы, тау башҡорттары был хәтле ыҙа-яфаларға хәҙер нисек сыҙап йәшәй икән?”

Ошоға яуап биргәндәй, әлеге уҙаман ҡарт тарих һөйләп алып китте:

– Йәмәғәт, мин ул Бөрйән башҡорттары, Алдар батыр хаҡында күп беләм. Яусыл, сәмсел халыҡ улар. Алдар батыр арҙаҡлы тархан да, үҙе бай кеше. Мал-тыуары, йылҡы малдары ер ҡаплап йөрөр булған. Заманында ул, ысынлап та, бөтөн Башҡортостанды яуға ҡуҙғатҡан. Ҡазандың үҙенә илсе булып барған уҙаман ул. Бына шундай батырҙар, ил ағалары булһа икән. Ундайҙар тоҡомо ҡоромағандыр әле. Бөрйәндәр күрһәтерҙәр әле үҙҙәрен.

– Беҙҙең яҡтыҡылар гел баҫылып йәшәгән инде. Баҫылғанды баҫымсылайҙар инде, нишләйһең, – тип һүҙ ҡушты бер йәшерәк ир.

– Улай тимә, кем, Шәмселислам, үҙебеҙҙекеләрҙе бик бөтөрөп тә ташлама, – тине уҙаман ҡарт. – Һин әле ул саҡ бала ғына булғанһың шул, ана, ололар беләә, беҙҙең яҡта ла утыҙынсы йылдар оло яуҙар булды. Миндейәр Ҡарабай батыр мең ярымлыҡ һыбайлыһы менән беҙҙең Синәр буйҙарын ҡыҙырып үтте. Һалйығут ир-егеттәре һәммәһе уға ҡушылды. Бәғәрәк ҡәлғәһенә сапҡын ҡылдылар, ҡәлғәһен-ниһен пыран-заран килтерҙеләр. Көньяҡлабыраҡ, Кәҫле тарафына Бәпәнәй абыз ике меңлек ғәскәре менән ябырылды. Әллә күпме ҡәлғә, биҫтәләрҙе алып, яндырып, пыр туҙҙырып китте. Бар ине ул замандар, бар ине ул батырҙар!

– Бәғәрәк ҡәлғәһен ҡыйратышҡан кешемен мин үҙем дә. – Шулай маһайып ҡалҡыныбыраҡ ҡуйҙы ҡарт уҙаман. – Әле былай ҡарт булғас, гел шулай икән тип уйламағыҙ. Ир-егет еткәндә тетмәһен теттек. Яуына ла йөрөнөк, дауында ла ҡатнаштыҡ. Кафырҙарҙы, монафиҡтарҙы ҡалтыратҡан саҡтар бар ине. Яуҙа яраһын да алдыҡ, аҙаҡ язаһын да татыныҡ, иллә-мәгәр теҙ сүкмәнек. Һай, ул замандар хәҙер һөйләргә генә ҡалды инде. Ат ҡушаҡлап яу сапмаҡ, дошмандарҙың ҡотон алмаҡ, пыр туҙҙырмаҡ үҙе бер ғүмер бит. Миндейәр батырҙың ғәййәрлектәрен күреү, Бәпәнәй абыз ҡоронда булыу үҙе генә ни тора...

Зарланып йәшәгәнсе, бер айбарланып ҡалһын ир-егет. Азаматтар ҡоронда йөрөү үҙе бер һиммәт.

Балы, ҡымыҙы менән ҡыҙып, һүҙе менән тамам мауығып киткән уҙаман үткән дау-яуҙар тураһында тағы байтаҡ нәмәләр һөйләне, йәштәрҙе үҙенсә сәмләндереп ебәрҙе, ир-егетлек намыҫтарына ла ҡағылды. Батыршаның көйрәй барған ҡуҙ төҫлө йөрәген ҡуҙғатты.

Бынан һуң да әле ҡайһы старшинаның командаһында элек һәм яңыраҡ ниндәй болалар булғанын иҫкә алып үттеләр, кәрәк икән, яңынан күтәрелеү ихтималын иҫкәрттеләр. Тимәк, халыҡта сабырлыҡ, ниндәйҙер өмөт тигәне лә бар. Ул хәтле ҡурҡыу-өркөү ҙә юҡ.

Батырша тағы бер нисә ауылда ҡунаҡта булды. Бер төрлөрәк һүҙҙәр, уртаҡ аһ-зарҙар ҡабатланды. Унан етмеш саҡырым арыраҡ Мансур яһауыл йортона ла миһманлыҡ ҡылды. Яһауыл үкенестәрен дә әйтеп ташланы.

— Падишаһыбыҙ тип, мосолмандарымдың ҡанын түктем, үҙем йәнемде йәлләмәй, уҡҡа, ҡылысҡа ҡаршы барып, күпме йәрәхәттәр зәхмәтен сиктем, – тине ул. — Ахыр кәмәләребеҙ ҡомға терәлде. Файҙаға тигәнебеҙ зыянға сыҡты. Хәләл тигәнебеҙ хәрәмгә әйләнде. Нисек үкенмәҫһең шуға? Золомға әүерелгән ғүмергә. Бына, бер ялсым бар ине. Һикһән һум бурыслы шул ялсымды суҡындырып, әллә күпме малымды тәләф итеп, Далматҡа алып киттеләр. Ялсым да юҡ, малым да сарыф. Үҙ ғүмеремдә тырышлыҡтарым да шуның тиңе инде, уйлаһаң.

Юлы-ние менән ике ай миҡдары йөрөп ҡайтты Батырша һалйығут тарафтарында. Ваҡ балалы ғаилә менән юл йөрөүе, әлбиттә, еңел түгел ине. Ҡарышҡа сөмбөләнең өсөндә (был ваҡыт 1754 йылдың июль аҙағына тура килә) генә ҡайтып төштөләр.

Ҡайтһа, тыуған тарафтары ла бик тыныс түгел икән. Төрлө хәбәрҙәр йөрөп ята. Уса менән Ҡазан юлы халыҡтарының да ризаһыҙлыҡтары үс-асыу булып ҡабарып, иләүҙәргә таралған. Һағайып, ниҙер көткән кеүек һәр кем. Оҙон юл йөрөп ҡайтҡан имамдарынан хәл һорашып, борсолоу-хәүефтәрен белдереп килгәндәре лә аҙ булманы. Ҡайҙа ла бер үк хәл, ғәуам ыҙа-яфаларға, ҡыҫымдарға зарлана, тине, әммә әллә ни асылып, һүҙен ҡуйыртып та ебәрмәне. Үҙе лә ниҙер көтә, уйҙарының осона сыға алмай ине, күрәһең. Халыҡ өҫтөнә төшкән золом-яфаларҙы бәйнә-бәйнә һанап, бәғзе түрәләрҙең яуызлыҡтарын, баш-баштаҡлыҡтарын күрһәтеп, ташлама вә еңеллектәр үтенеп губерна үҙәгенә, әллә пайтәхеткәме, хатта падишаһтарының үҙенә үкме дәғүәтнамә яҙып ҡарарғамы тамғалар һалып, тигән уй менән дә баш ватып ҡараны имам. Быға ҡырҡ төрлө шик-шөбһәһе ҡаршы төштө. Халыҡты йыйып, кәңәшләшеп, тамғаларҙы һалдыҡ та ти, ә губернаторына, пайтәхәтенә барырға пашпуртын кем бирә, рөхсәтен кем бирер? Һүҙ тейгән түрәләр үҙҙәренән аша ебәрә буламы. Ул ғынамы, бурҙар, боласылар тип ябып ҡуйыр, баштарҙы ашар, һөргөн һөрөр. Көт ундайҙарҙан йүн. Юлда йөҙ төрлө ҡаршылыҡ, кәртә. Зарҙарыбыҙҙы, үтенестәребеҙҙе бадишаһыбыҙ хозурына еткерергә һис бер сара вә әмәлебеҙ юҡ шул.

Ҡаңғырып шулай аңҡы-тиңке килгән саҡта Батыршаға Күҙәй иләүенән ике башҡорт һуғылып китте. Икеһе лә Шағанай старшина командаһынан ине. “Урман иләүенә барабыҙ, юл айҡап, хәҙрәтебеҙҙе күреп, хәлен белешеп сығайыҡ, тип индек”, – тинеләр. Мираҫ малы мәсьәләһенән бер-ике кәңәш һоранылар.

– Ни хәбәрҙәр ишетелә йөрөгән, торған ерҙәрегеҙҙә? – үҙ сиратында шуларҙы һорашты Батырша. – Ил-йортоғоҙҙағы халыҡтар ни хәлдә вә ни кәңәштә торалар?

– Хәҙрәт, һинән йәшереп-нитеп тормайбыҙ. Ышанысыбыҙ камил, хәҡиҡәттә шулдыр: беҙҙең күҙәйҙәр вә һәм Әй буйҙары, Урал арьяҡтары вә Нуғай юлы башҡорттары менән хәбәрләшеп, һүҙ беркеткәнбеҙ: кафырҙарҙың тәҡәт тотҡоһоҙ яфалары сәбәбенән ғажиз булмаҡтан, һуғыш ҡоралдары әҙерләп яу сыҡмаға.

– Ни ваҡытта?

– Әлегә ваҡыты тәғәйен түгел. Вә ләкин һәр кем әҙер торһон тип хәбәрләштеләр.

– Ә Урман иләүенә хәбәрләшер өсөн бараһығыҙмы?

– Төп йомошобоҙ алыш-биреш... Керештәрен тартып ҡарамаҡ та уй бар.

Киттеләр былар.

Унан һуң Сөләймән старшина ауылының шәкерте Ғәбделсаттар, Ҡарғалынан Ғәбделсәләм ахун мәҙрәсәһенән ҡайтышлай Ҡарышҡа һуғылды. Һуңғыһы менән дә Батырша күрешеп, һөйләшеп ҡалды:

– Ғәбделсаттар мөллә, Ырымбур ҡәҙәре йыраҡ юлдан килдең, ул яҡта ниҙәр бар, ни хәбәрҙәр ишеттең?

– Ҡарғалы йәмәғәттәре араһында ишетеләләр, башҡорттар ырыу-ырыу кәңәшкәндәр, береккәндәр, оҙаҡламай шәйәт күтәрелерҙәр тип. Тағы бер-ике кешенән ишеттем, ҡарғалылар ҙа тик ятмай шәй. Яҡуп тигән тылмас әйткән икән, ислам даирәләренән бындағы мосолмандарға ярҙам киләсәк, имеш, типме.

– Ҡарғалының дин әһелдәре ни хәлдә, ни һөйләйҙәр?

– Мәсет ҡарттары, йортҡа бөлгөнлөктәр төшмәһә ине, тип хафаланалар, ә йәштәр, башҡорттар менән берегергә кәрәк ине, тиҙәр.

– Тағы ниҙәр бар?

– Ҡайтҡан юлымда Өфө эргәһендәге Сафар вә Тирмә ауылдарынан һораштым, һеҙ ни хәлдә тораһығыҙ, тип. Улар әйтте: ҡайһы тараф ҡотло булһа, шул тарафта булырбыҙ, тип.

– Үҙең Ҡарғалыға кире ҡасан әйләнәһең?

– Биш-алты көндән.

– Бына нәмә, Ғәбделсаттар мулла, дәхи һәр тарафтан хәбәрдар булғыл, ғәуам һүҙенә ҡолаҡ һалғыл. Мөмкин булған сағында беҙҙәргә белдергел. Мәмнүн булырмын.

– Иншалла.

Юлаусыларҙың быңдай хәбәрҙәре Батыршаның уй-ниәттәрен бөтөнләй яңы йүнәлешкә бороп ебәрҙе. Уның уйҙарын шул йәй һәм көҙ көндәрендә инеп-китеп йөрөгән бүтән кешеләр йәнә нығытыштылар. Бәғзеләре бер йомош табып йә бүтән һылтау менән уға атап килә ине. Икешәр, өсәр, тағы күберәк көнлөк юлдарҙан. Кәңәшер, килешер өсөн.

Батырша үҙе лә тик ятманы. Иләү менән иләүҙе бәйләр кәңәшсе ил ағаһына әйләнде, үҙе лә кәрәк еренә сапҡынын, йә йәйәүләһен ебәргеләй торҙо.

Ил эсендә инде хәҙер әллә ни йәшерен-батырын түгел, ауаз булып хәбәр иркен йөрөй ине:

— Киләһе йәй күк ут ваҡытында башҡорттар атҡа атланмаҡ икән.

— Башҡорттар атланһалар, мишәрҙәр ҙә ҡушылабыҙ тиҙәр.

— Килер ул, яҡын ул үс алаһы көндәр...

Сана юлы төшөү менән Батырша Уран иләүенә йүнәлде. Һылтауы ла нигеҙле: Өфө ҡәлғәһенән указ менән тәрикә малын бүлергә саҡырылғайны. Иректе иләүенең старшинаһы Шәриф Кейеков менән башта Уртауылда туҡталдылар. Яңыраҡ вафат булған Султыҡ старшинаның мираҫ мал-мөлкәтен китап хөкөмө менән бүлделәр. Шунда тәрикә малын тикшереп, мәжлестәрҙә йөрөп аҙна үтте. Күрше-тирә ауылдарға ла саҡырҙылар оло ҡунаҡтарҙы. Дин, көн йомоштарын табып, атаҡлы имам хатип мөҙәрискә күптәр килер булды. Ғалим-ғөләмә мәжлесенә йомошлоһо-йомошһоҙо ла нәсихәттәр вә ғибрәттәр алыр өсөн йыйылыр ине. Батырша үҙ нәүбәтендә Уран иләүе башҡорттарының батырлыҡ, яугирлыҡ тураһындағы әңгәмәләрен кинәнеп тыңланы. “Беҙҙең урман халайыҡтарыбыҙ, башҡорттарыбыҙ вә ғәйреләребеҙ ғәйәт бәһлеүәндәр вә уҡ атырға ғәйәт мәргәндәрҙер, – тип һөйләне, мәҫәлән, бер аҡһаҡал. – Ҡырҡар-иллешәр тинлек санай йәйәләребеҙ ялан башҡорттарының унар, егермешәр һумлыҡ әҙернә йәйәләренән артығыраҡтыр. Санай йәйә атышҡан һайын ҡеүәтләнер. Атҡан уҡтарыбыҙ бушҡа китмәйҙер. Тейенен, кейеген шул уҡ менән алабыҙ (Батырша Гәйнәлә санай йәйәлә атырға өйрәнгәндәрен, һунарға йөрөгәндәрен хәтерләп алды). Егеттәребеҙ вә һәм саңғы менән йөрөргә шул ҡәҙәр оҫталар, урман эсендә ҡасҡан кейек ҡотолмайҙыр. Алдында арҡылы ятҡан ат бейеклек ағастарҙы һикертеп сығалар, юлдан елгән аттарҙы саңғысылар еткермәйҙәр. Вә һәм йөрәклектә шул ҡәҙәрлеләрҙер, мәҫәлән, үткән йылдарҙағы бер яуҙа Гәйнә иләүенең уртаһына меңләп хөкүмәт ғәскәре килеп тупланып яттылар. Гәйнәләрҙе сабыр өсөн. Шул ваҡыт беҙҙең гәйнәләр, дүрт йөҙ ҡәҙәре кеше, уҡ-һөңгө менән ҡоралланып, әлеге полкты сабып, ҡәлғә һуҡҡан ерен ҡыйратып, тегеләрҙе ҡыуып ебәрҙеләр. Туптарын ҡулға төшөрҙөләр. Аҙаҡ, ярашыу булғандан һуң, туптарын килеп алдылар. Белегеҙ, шундай ғәййәр халыҡ ул гәйнәләр. Аптырайым, хәҙерге ир-аттар, гәйнә ырыуы нисек түҙә икән бынауы яфаларға, кафырҙарҙың динебеҙҙе мәсхәрәләүенә. Күкрәктәрендә йөрәктәре юҡмы икән әллә?”

Шулай сәмләндереү, сәмләшеү, һалйығуттарҙағы шикелле, бында ла ҡыҙып китте. Тура һүҙгә сыҙап ҡына тор.

Остазының Уранға килеүен ишетеп, Илештән килеп төшкән Исхаҡ шәкерте менән, форсатын табып, оҙаҡ ҡына гәпләште Батырша. Илештәрҙең хәл-әхүәлдәрен һорашты, унан иләү хәлдәренә инеп киттеләр. Остазы ышаныслы шәкертенә байтаҡ ҡына кәңәштәр бирҙе, әҙерлек, бағланыш мәсьәләләрен төпсөп һөйләштеләр.

Шул ҡышты Гәрәй иләүенә лә алдырҙылар Батыршаны тәрикә малы бүлергә. Шәриғәт ҡушҡанса ғәҙеллек менән мираҫ малын бүлеүҙән битәр,

ил ағалары, ил батырҙары менән кәңәшләшмәктә ине төп шөғөлө Батыршаның.

1754 йылдың йәйе, 1755 йылдың ҡышы шулай ил эсендә уҙҙы.

## Халыҡҡа өндәмә хат

Йөрөмтәл Батырша уйсан аҡһаҡалға әйләнде. Ил ғәме ине ир башында: сабырлыҡтың да бер сиге бар. Халыҡтың үс-һарыуы ҡабарған саҡ, ҡур өҫтәмәк лазым. Өҫтәнеңме – көтмәк, өлгөрҙөмө ормаҡ кәрәк. Ормағына ҡорал-ярағы, тоторына ғәййәр ир-аты.

Кемдер тәүәккәлләргә, әҙерләшергә тейештер бит. Яуға батыры кәрәк булһа, дауына сәсәне хәжәт. Илдең ағалары, абыздары, ғалим-ғөләмәһе һүҙ әйтергә ваҡыттыр. Илгә оран һалырға.

Уйлағаның алдыңа килә, ти. Хоҙай бойорғандыр, болоҡһоған бер ҡыш көнөндә, хәмәл йондоҙонда (был 1755 йылдың февраль аҙаҡтарына тура килә) Батырша ыҙбаһына кисләтеп бер башҡорт килеп инде. Атлы юлаусы. Юлы йыраҡтан ғына, ахырыһы, үҙе йонсоу, аты арыған. Үтеп барышлай атап хәҙрәткә туҡталғанлығын, йомошо барлығын, ҡунып китергә теләүен әйтте.

Юлаусы өйгә индеме – ҡунаҡ, атын-ниен урынлаштырышырға, үҙен ашатырға, ял бирергә кәрәк. Шулай ашап-эсеп, бер аҙ хәл йыйып алғас, ғаиләһе йоҡоға ятҡас, хилүәттә төп йомошто тыңларға сират етте.

– Нуғай юлының ҡайһы иләүенән вә ҡәрйәһенән үҙең? – тип аныҡлап һораны Батырша.

– Кәлсәр иләүенең Ҙур Үтәш ҡәрйәһе.

– Исем-шәрефең кем?

– Исмәғил Байрамғол уғлы...

– Юл йөрөштәрең ҡай тарафҡа?

– Әй буйына, Дыуан-Мәсет йортона. Хәҙрәт, һеҙгә төп йомошомдо әйтәйем: һиңә минең арттан түрәләребеҙ хат ебәргәйне. — Шул саҡ юлаусы, оҙаҡ ҡына мыштырлап, ҡуйынынан төрөлгән яҙыу киҫәген сығарып, Батыршаға тотторҙо. Төрөп бәйләп, һурғыслап мисәте баҫылған ҡағыҙ. Мисәтен боҙоп, төргәген һүтеп, яҙыуын ҡулына алды. Тигеҙ нәстәлих яҙыулы ярым ғәрәпсә мәктүп. “Бу тарафның бәзереүәләренән ул тарафның бәзерҡеүәләренә доғалардин ҡизин әғләмдер, ошбу кем фараз вә лазымдар һиммәт идәләр...” Шулай хат юлдары буйынса күҙе йүгереп, ашығып аша-аша үтте лә, әллә аңламаҡ өсөн юлсыға тура ҡарап, ҡәтғи һорау бирҙе Батырша:

– Был яҙыу кемдән?

– Иғтибарлап уҡыһаң, мәғлүм булмаҫмы? – тине Исмәғил.

– Был хаттан мәғлүм түгел ис кем яҙмалығы. Исеме ҡуйылмаған. Мәктүпте һиңә кем бирҙе?

– Мин үҙем яҙыу-фәлән танымайым. Муллабыҙ менән писырыбыҙ Ырымбур тарафына барып ҡайтҡайнылар. Икеме тапҡыр йөрөп килгәс,

ошо яҙыуҙы миңә бирҙеләр, һиңә тапшырыр өсөн. Себер юлы Ҡарыш-баш ҡәрйәһе олуғ хәҙрәтебеҙ Баһадиршаһҡа үҙ ҡулына илтеп тотторорға тип, һис бүтән күрмәһен, белмәһен, тип киҫәттеләр. Яҙыуҙың кемдән икәнен әйтмәнеләр. Әммә ләкин әйттеләр: ”Хәҙрәт уҡымаҡ иһә, үҙе тиҙ фәһемләр яҙыу кемдән икәнен”, – тинеләр.

Батырша был ҡош телендәй генә хатты йәнә бер-ике тапҡыр уҡып сығып, уйға ҡалды: тәғәйен кемдән булыр икән? Килешле яҙыуына, гизләндергән мәғәнәләренә ҡарағанда, шәйәт, ахундан йәки ғилемлеге камил кемеһенәндер. Буш һәм һынамаҡ әҙәмдәрҙән быңдай балиғәтле[17] вә фәсәхәтле[18] эш пәйҙә булмаҫ. Үҙе һыналамы, үҙе һынаймы, ҡапыл тағы ҡырҡараҡ өндәште йомошлоһона:

— Быны монафиҡтар яҙғансы, ҡотҡо итеп. Тотторорға кәрәк үҙҙәрен. Кемдәр улар? Әйт турыһын!... Әйтмәһәң, үҙеңде старшина ҡулына тапшырам, яман эш менән йөрөгәнең өсөн.

Исмәғил ағарынып китте лә хужа алдында тубыҡлана сүкте:

— Әй Вәлиниғмәт, һинең мөбәрәк исемеңде, яҡшы яйынды ишеткәйнем. Хажиҙар ҡәғбәне күрмәгә мохтаж булған кеүек, йөҙөңдө күрмәгә мохтаж булып, йыраҡ ерҙән шатланып килдем. Әгәр һин был яҙыуҙы ҡабул итмәһәң дә, миңә рәнйеү төшөрмәһәң ине. Мин ололар ҡушҡанын үтәнем. Хоҙайым шаһит.

Быңдай яуаптан Батырша иҫәңгерәп үк ҡуйҙы.

– Тор, әй, һөйөклө, һынамаҡ өсөн генә әйтәм. Ҡурҡма, – тине ул. – Олуғ дин әһелдәребеҙ, бәлки, ахундарыбыҙҙың Аллаһы тәғәләбеҙ бойормаҡ вәжһеләр[19]. Йомош-юлың игелеккә булһын.

Тынысландырып, иртән үҙенә юллыҡ аҡса, атына бесәнен һалып оҙатты ул йомошло юлсыһын.

Хикмәтле яҙыуҙы ҡат-ҡат уҡып, төрлө уйҙар эсендә йөҙҙө Батырша. Һүҙҙәре үтә кинәйәле, тәғбирҙәре Ҡөрьән аятлы шул бары. “Алла динүне әғлә итмәккә вәжаһдиуа бамуалкум вә әл фәселкум, әмере илә вә тәкриз идәлер мөьминләре хәррасел мөьмин гәләикәтен әмере илә... истихзар идәләр әтиғу алла вә әтиғу лә рәсүл әмере илә” – мөьминдәр, Алла бойорғанын үтәргә, йән-тәнегеҙҙе фиҙа ҡылырға әҙерләнегеҙ... Аяттың мәфһүме[20] ибтида ҡылыныр[21] нәжме жәүсәнең ахыр көндәрендә. Тимәк, Ҡөрьән һүҙҙәре менән Аллаһы тәғәлә исеменән мөьминдәргә тәхриз-намә – өндәү яҙмаҡ хаҡ.

Хәтеренә төштө: өсмө-дүртме йыл әүәл остазы Ғәбделсәләм ахун динебеҙгә, мөьминдәргә килгән ноҡсанлыҡтар хаҡында һөйләшкәндә әйтә биреп ҡуйғайны ис диндәштәребеҙҙе ҡуҙғатмаҡ хаҡында. Шул һүҙҙең дауамылыр был мәктүп. Мотлаҡ шул даирәнән сыға. Ошондай саҡта кәңәшләшергә ышаныслы кешеләрең булһа икән. Мөслим аға эргәлә булһасы.

Тирә-яғыбыҙҙы золомлоҡ уты ялмап алып бара шул. Динебеҙ, көнөбөҙ ҡыҫыла. Халайыҡтың аһ-зарҙарын, үс-асыуҙарын күп ишеттек, хәҙер ҡалҡынырға торғандарын тойҙоҡ. Улар бит ил ағаларының, ғалим-ғөләмәләренең хаҡ һүҙен көтә. Кемдер быны әйтеп оран һалырға ла

тейештер ҙә. Остаздарынан, ололарҙан килгән ҡош телендәй яҙыу шуға өндәмәк түгелме һуң? Тағы ни көтәргә? Үҙеңде өгөтләгәндеме? Аллаһы тәғәләгә таянып тәүәккәлләргә кәрәк. Шулай ҡәтғи ҡарарға килде, ниһайәт, Батырша. Диндәштәрен, динен, көнөн яҡлап яуға күтәрелергә өндәмә – тәхризнамә яҙырға ултырҙы ул.

Ҡулына ҡаурый ҡәләмен алыуы булды, Рәсәйҙә утрау-утрау төҫлө яҡтан ислам дине ғимараттарын[22], жамиғ-мәсеттәрен ут ҡаплап алғандай, диндәштәре быға аптырап ғажиз булып торғандай күренде. Шул ялҡын уты йөҙөнә ҡағылып, тыштан да, эстән дә ҡыҙа барған миҫле тойҙо үҙен. Яман утты йәһәтерәк һүндереп, ислам милкен, мөьминдәрен сәләмәт, мәғмүр[23] итеп күрмәк теләге менән дөрләне. (Бөтә барлығын белгән был ялҡынлы хисен Батырша аҙаҡ батшаға яҙыр хатында тура әйтте: “Ул утты һүндереп, динемеҙ милкен сәләмәт ә мәғмүр ә мөғәлли[24] итмәккә бән фәкир ә ул мәзнүр мәшәүәрәт ә иттифаҡ ителгән эштәрҙе эшләмәккә өгөтләмәк вә ҡыҙҙырмаҡ яҙыуҙы яҙмаҡҡа шәруғ әйләнәм”.

Өгөтләмәк, ҡыҙҙырмаҡ яҙыу. Оран. Бисмиллаһы мотлаҡан Ҡөрьән аяты: “Әлтәүкел ғали әлид вә әл ҡеүәт ғали тәйбиә вә ғали алла вә баға бә әл-мәжә ләдиб ҡад сәбиблә эстәт алла лә әғлағ лединә вә бәхед Гөбәйдулла Мәгдәләрдин тәдкирә вә тәхризә итәлер”. Йәғни: Аллаһы тәғәләһенә вә пәйғәмбәренә һығынып, хаҡ динен һаҡлар вә яҡлар өсөн доғалар ҡылып, Алла бәндәһе Ғөбәйдулла Мәғдәлетдин өндәмә әйтер. Шулай булды баш башламыш. Өндәмә-тәхризнамә мөнбәрҙән тороп ҡына һөйләр хөтбә вә вәғәз түгел шул, аҡҡа төшкән яҙма. Уның Ҡөрьән аяттары менән һөйләр, һәр фекерен аят менән нығытыр әғла ыслубы булыр. Һәр бер тәғбире мәғәнәле вә мөьмин күңелдәренә үтеп инмәле яңғырарға лазым.

“Әй урыҫ вәләйәтендә торғоусы ислам әһелдәре вәли кафыр вә золом урыҫтың хур яфаһындин вә мәкер иһә хәйләһендин бисара вә битәкәт булып рузгәр[25] кисергән көслө имам әһелдәре белеңеҙҙәр вә әғлә улыңыҙҙар”, – тип теҙеп алып китте мөрәжәғәт башын.

Мосолмандарҙың ҡеүәтләнмәк боронғо Болғар осорҙарын, хандар дәүерен хәтерҙәренә төшөрҙө. Бар ине ҡеүәтле заманалары. Мөхәммәт пәйғәмбәрҙәренә шафиғ килтереп, хәрби ҡоралдар менән ярағланып, ғазыйлыҡ аттарына менеп, дошмандарын жәң ҡылған[26] саҡтары. Урыҫ батшаһы ҡул аҫтында ҡалғас, китте ҡәҙерҙәре, диндәрен ҡыҫыу, сыҡындырыуҙары. Арала монафиҡтар табылып, кафыр динен, көнөн ҡеүәтләгәндәре. Килде шулай ыҙа-яфалы замандар мосолмандарға. Ата-бабаларының боронғо ҡағиҙәләрен, ислам динен тотҡан һиммәтлеләренең баштарын сабып, мал-мөлкәтен талап, уғыл-ҡыҙҙарын бәндә вә әсир иткәндәре, төрлө золом, боҙоҡлоҡ, бәхшиш, фәхеш ҡылғандары. Ерҙәрҙән, малдарҙан яҙмаҡ, әрме, ылау хеҙмәте менән ыҙаланыуҙар, һалымдар менән бөгөлдөрөүҙәр, мыҫҡыл итмәк, туҡмамаҡ, үлтермәктәр... Мосолман өҫтөнә төшкән йәбер-золомдоң, яфаларҙың барыһын һанап, иҫтәренә төшөрөп үтте бәндәләрҙең.

“Әй мөьминдәр вә мәүхәттәр, юғарыла яд ҡылынған хәлдәрҙе, яфаларҙы иҫтә тотоп фекергә киләйек, – тип дауам итте Батырша. — Баштарыбыҙ вә аттарыбыҙ илә төрлө ауыр хеҙмәттәр итеп, сиреү итмәк, тик лапотник эшен эшләп, кафыр ҡәлғәләрен  нығытмаҡ, ҡәлғәнән ҡәлғәгә ылау ҡыумаҡ, ата-бабаларыбыҙҙың ҡәҙими замандан бирле торған ерҙәрен-һыуҙарын ирек ҡуйып ҡәлғәләр вә завуттар төҙөмәк, вә бынан ғәйре бүтән эштәрен башҡармаҡ, кафырҙарға ярҙамсы булып, ислам йәмәғәттәре бихеҙмәт вә бинаһәйә хур вә яфалар ирештермәкдән вә ислам диненә көндөң-көн зәғифлектәр килтермәк эштәрҙән ҡайтығыҙ, тәүбә итегеҙ! Ислам хаҡына ғәһедләнегеҙ!”

Вәғәз һымаҡ шулай оҙон һуҙып та яҙғыланы Батырша. Яҙғанына йәнә кире ҡайтты. Тәүге биттәрҙең әллә нисәмә ҡараламаһы барлыҡҡа килде. Өндәмәне ил ағалары, ғалим-ғөләмә генә түгел, бар ғәм-ғәуам, ҡарты ла, йәше лә аңларлыҡ булһын. Тағы мөһиме: йөрәктәренә барып етһен ине. Намыҫтарын ҡуҙғатырлыҡ, ҡыҙҙырып ебәрерлек булһын ине. Өндәмә икән, өндәмә: оран төҫлө лә яңғыраһын: “...пак динле мөьминдәр, ҡатланығыҙ, ҡатланығыҙ! Уҡ, ҡылыс вә һөңгө вә һәр ни, кем, кәрәктер хәленсә әҙерләнегеҙ, Аллаһы тәғәләнең әмеренә итәғәт вә имтизал итеп...”

Батырша мулла – дин әһеле – белә мөьминдәренең Аллаға ныҡ һығыныуын, дингә инаныуын, шуға ислам хаҡына Мөхәммәт пәйғәмбәрҙәре исемен йыш ҡушып яҙырға тырыша. Диндәштәренең рухына һуҡтыра: “...ислам динемеҙҙе ҡотолдормаҡҡа һиммәт ҡылайыҡ! Пәйғәмбәре Мөхәммәт әйткәнен тотоп, ерҙәребеҙҙә мәсеттәр вә мәҙрәсәләр бина ҡылайыҡ!...”

Дин һуғышы тип тә ҡыҙҙырмаҡсы ул мөьминдәрен:

“Бәс, мөьминдәр вә меүәхәттәр, вә әй егеттәр, вә әй ҡарыйҙар, вә әй атлылар, вә әй йәйәүлеләр, яраҡланығыҙҙар! Сынғыҙҙар, йыһат ҡылыңыҙҙар!...”

Бына нисәмә көн инде Батырша шул өндәмәһен яҙыу менән мәшғүл. Хатта йоҡлар йоҡоларын, ашар аштарын онотто. Үҙен бер үтә яуаплы изге эшкә тотонған кеше итеп тоя, ниндәйҙер бер рухи ҡәнәғәтлек эсендә йөҙә ине. Үҙе әйткәнсә, өгөтләмәк вә ҡыҙҙырмаҡ яҙыуына, гүйә, бөтә йөрәк йылыһын, йыйылған бар асыу-үсен дә һала ине ул.

Иртә яҙҙа, хәмәл йондоҙонда өйҙә кеше-ят күҙҙәренән һаҡланып, бүлә-бүлә яҙҙы тәхризнамәһен.  Зөлбохары ниндәйҙер мөһим яҙыу икәнен самалаһа ла, ире, ахундар бойормош тәзкирә тигәс, дини бер шәрехкә юраны. Ире ниндәйҙер йомоштар табып, бер нисә тапҡыр ике-өс көнгә ауылдарға, иләүҙәргә сығып әйләнде. Кемдәрҙер менән кәңәшләште буғай. Яхия, Моталлап, Исмәғил шәкерттәренә төрлө йомоштар ҡушты. Өйөндә ике башҡорт старшинаһы менән осрашты. Өйҙә лә, келәткә лә инеп  оҙаҡ-оҙаҡ ниҙер гәпләштеләр. Мөкиббән ине ул мөһим шөғөлө менән.

Был айҙарҙа өйөндә  һәм ауылында ла имам-хатиптарының ни менән шөғөлләнгәнлеген йүнләп белгән кеше булмағандыр, моғайын. Мулла

кеше ни яҙмаç та, илдә ниндәй йомош менән йөрөмәç. Апрель айында, май баштарындағы шөғөлөн аҙаҡ өндәмәһенә күсерер шундай юлдар асыҡланыр: “Башҡорттарҙың вә мишәрҙәрҙең вә ғәйреләрҙең хассиҙары берлә, йәғни яҡшылары берлә хәбәрләшеп серҙәр вә хәлдәр аңлаштыҡ. Кем, барсалары бер һүҙле вә бер күңеллеләрҙер. Ислам хаҡына баштарымыҙ вә йәндәремеҙ фида булһын, бер себен тик йәндәребеҙҙе аямаçбыҙ, тип антында торалар”.

Ышаныслы башҡорт старшиналары, яҡшылары ярҙамында ҡырғыҙ-ҡайсаҡтар менән дә һүҙ беркеткәндәр икән. Бөтә мосолман вә һәм шул иçәптән ҡырғыҙҙар ҙа бергә күтәреләсәктәре өндәмәлә әйтеп бирелгән икән. Өфө өйәҙенең дүрт юл халҡы вә ҡырғыҙ-ҡайсағы хәбәрләшеп берегеп, ислам тыуын тотоп, кафырҙарға ҡаршы йыһат асмаҡтар. Төрлө тарафтар берҙәм булып, бер көндә яуға күтәрелеү ваҡыты ла тәғәйен күрһәтелә өндәмәлә.

“Әссәләмәғәләйкүм, ислам әһелдәре! Белегеҙ һәм аңлағыҙ ки, беҙ Ғөбәйдулла Мәғдәндин, дүрт юл халҡы мосолмандарының хәлдәрене вә серҙәрене юғарыла әйткәнебеҙсә тикшереп, вә аңлашып, вә һиммәт эйәһе ғалимдар, вә тигеҙ халайыҡтар кәңәшен, сәнә ғәйәт-фытырҙан һуң шәүәлдең дүртенсе көнөндә (был 1755 йылдың 3 июль көнөнә тура килә) Аллаһы тәғәлә тарафтарға яуҙар вә хәбәрҙәр ебәрҙек”, – тип яҙып ҡуйҙы Батырша.

Өндәмәһендә тағы нисек берҙәм күтәрелеү, монафиҡ старшиналарҙы ҡулға алыу, бергә хәрәкәт итеү тураһында иçкә төшөрөп, аҙағын шулай тамамлауҙы кәрәк тапты: “Был мөбәрәкнамә ебәрелде Себер юлында тороусы мосолмандарыбыҙға. Тәкем был яҙыуҙы тикшереп вәғәҙәләнгән эшкә әҙер булғайҙар вә ғафил тормағайҙар. Был яҙыуҙы уҡыған бер кеше ҡулдан-ҡулға, илдән-илгә һис йыбанмайынса йөрөткәйәр”.

Өндәмәне, ниһайәт, тамамлап аҡҡа күсереп сыҡты. Ғәрәп хәрефтәре менән ваҡ ҡына семерләп яҙылһа  ла, ҙур ғына булған икән. Һәлмәк тәхризнамә.

Көндәр йылытҡас, күп ваҡытын Батырша келәтендә ултырып эшләне. Ят күҙҙән аулаҡ урын. Төп нөсхә әле эштең башы ғына. Тәхризнамәне күбәйтәһе, кәм тигәндә унлап дана күсерәһен бар төрлө тарафҡа таратыр өсөн. Батырша бығаса ышаныслы шәкерттәрен бимазаламағайны. Хәҙер уларһыҙ, ярҙамсыларһыҙ бер ни эшләп булмай. Яхия, Моталлап, Исмәғил, Ибраһим атлы иң ышаныслы, тыңлаусан шәкерт-талмидтарына ул диндәре, көндәре өсөн тырышлыҡ, кәрәк икән, йәндәрен фида ҡылырға әҙер тормаҡ рухында һүҙ йөрөтә, күңелдәренә һеңдерә килә ине инде. Хәҙер уларға таянырға булыр – фидәкәр тәғәссеп талмидтар.

Шулай итеп, остазы дүрт шәкертен тәхризнамәне күсерергә ултыртты. Улар уны ят күҙҙәрҙән хилүәт урында – әлеге келәттә, аулаҡ саҡта мәсеттә, көндәр матурланғас ҡырҙа ла – иркенләп күсереп яҙҙылар. Шулай һигеҙме-туғыҙмы күсермә барлыҡҡа килде. Бисмиллаһынан беренсе тәхризнамәне Ҡазан өйәҙле Исмәғил талмиды аша тәүәккәлләп

Гәйнә иләүенә ебәрҙе. Атҡа атланып алған талмидына Батырша йәнә ҡабатлап әйтеүҙе кәрәк тапты: “Шунса кешегә хилүәт ерҙә генә үҙ ҡулына тапшыр. Әйткел: “Ялан тарафлылар был намә эсендәге бойоролған эштәргә һиммәт итәләр. Һеҙҙәр һәм ошбу намә эсендәге әмерҙәр мәүжебенсә һиммәт вә итмәк лазымдар тип әйтте остазыбыҙ”.

Өс-дүрт көн эсендә Исмәғил яҙыуҙы Гәйнәгә илтеп, имен-аман әйләнеп ҡайтты. “Әй хәҙрәт, әмерегеҙҙе еренә еткереп, тейешле кешеһенә тапшырҙым”, — тине.

Әлеге шәкерт-талмидтары менән Уран иләүенә, Себер юлына, бүтән тарафтарға ла өндәмә хаттары китте. Улар ҙа имен-аман тапшырып ҡайттылар. Хәҙер түҙемһеҙлек менән көтәһе ҡалды.

## ИҪКӘРМӘЛӘР

[1] Төмән — хәҙер был ерҙә Темников тигән ҡала бар. Ҡаланы ун меңлек татар ғәскәре башлығы Төмән нигеҙләнгән булһа кәрәк, исеме шунан ҡалған.

[2] Рәшид сәхиб — тоғро шәкерт.

[3] Әлмәт — хәҙерге Татарстандағы Әлмәт ҡалаһы урынында.

[4] Мөҙәрис — уҡытыусы.

[5] Тәғбир — аңлатма.

[6] Мөсәхәбә — дискуссия.

[7] Әсәс — нигеҙ.

[8] Тәкәллеф — церемония.

[9] Баһадиршаһ — Батыршаның ғәрәпсә тулы исеме.

[10] Мәсләк — йүнәлеш.

[11] Сөал әйләү — һорау ҡуйыу.

[12] Ямаллы — матур.

[13] Геүаһлыҡ — шаһитлыҡ.

[14] Дәм ормаҡ — һулыш алмаҡ.

[15] Тәсарыф ҡылыу — эйә булыу.

[16] Вәсиләһе — һылтауы.

[17] Балиғәтле — камил, кәмселекһеҙ.

[18] Фәсәхәтле — матур телле, мауыҡтырғыс.

[19] Вәжһе — рәүеш.

[20] Мәфһүме — аңлашылған мәғәнәһе.

[21] Ибтида ҡылыныр — башланыр.

[22] Ғимарат — ҡоролма.

[23] Мәғмүр — төҙөк.

[24] Мәғәлли — юғары, бөйөк.

[25] Рузгәр — ғүмер.

[26] Жәң ҡылған — еңеп сыҡҡан.

*(Дауамы киләһе һанда)*